ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 июнь (һөтәй) 2016
№24 (702)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Матур үҙгәрештәргә...**



өйрәнеп тә бөткән халыҡ

4-5

**Инглиз телендә аралашыу...**

мәктәптең үҙендә



6

**Асылаһы серҙәр алда әле...**



7

**Аҡсаһыҙлыҡ көрсөгөн...**

"шайморатиктар" ярҙамында хәл иттек



8-9

**ТВ-программа** 14

**МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!**
***Йортоғоҙҙа аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәгеҙ, "Киске Өфө"лө булығыҙ. Ни өсөн "Киске Өфө" гәзитен уҡырға кәрәк? Алтынсы сәбәп. Уңышлы кеше булыр өсөн."Уңыш ҡаҙан" рубрикаһында донъя кимәлендәге иң уңышлы кешеләрҙең тәжрибәһе күптәргә дөрөҫ юл табырға ярҙам итә.***
***Гәзиттең индексы - 50665, 6 айға яҙылыу хаҡы - 574 һум 32 тин.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## "Өфө калаһы ни өсөн матур?" тигән һорауға әленән-әле яуап эҙләйбеҙ. Ә шулай ҙа, әйтегеҙ әле, уның матурлығын һеҙ ниҙә күрәһегеҙ?

***Роза ТАҺИРОВА, Әбйәлил районының "Аҙинәйҙәр ҡоро" етәксеһе:*** Баш ҡалабыҙ Өфө күңелемә айырыуса яҡын минең. 1966 йылда ошонда институт тамамланым. Ул ваҡыттарҙан бирле ярты быуат үтеп киткән! Әлбиттә, баш ҡалабыҙ ҙа бик үҙгәрҙе, танымаҫлыҡ булып матурайҙы. Килгән һайын яңынан-яңы үҙгәрештәр күҙгә ташлана. Ә беҙҙең юғары уҡыу йортона уҡырға килгән саҡтағы Өфөгә ҡарап та иҫебеҙ китә ине: йорттары бейек, урамдары күп - аҙашып китерһең! Бөгөн иһә башҡалабыҙ өр-яңынан тыуған кеүек: йорттары тағы ла бейегерәк, урамдары тағы ла киңерәк, машиналарҙың ниндәйе генә юҡ! Улар йәйәүлеләргә ҡарағанда күберәк тә кеүек. Ә бына матурлығы ниҙә күренә һуң ҡалабыҙҙың? Заманса архитектураһы, иркен, көҙгөләй ялтырап ятҡан асфальт юлдарынан тыш, йәшеллек һәм сәскәләргә күмелеп ултырыуы күңелгә ятышлы ҡаланың. Былтыр булып үткән ШОС һәм БРИКС саммиттарын бигерәк ныҡ әҙерләнеп ҡаршылағаны күренеп тора Өфөбөҙҙөң: Европа, донъя кимәлендәге ҡунаҡханалар, офис биналары төҙөлөшө тураһында гел уҡып барҙыҡ "Киске Өфө" гәзитенән. Элек уның биҙәлешенә, милли колоритҡа әллә ни иғтибар бирелмәй ине, бөгөн был йәһәттән алға китеш күренә, тик шулай ҙа тәү ҡараштан уҡ, был - Башҡортостан ҡалаһы, тип әйтерлек билдәләр юҡ әлегә. Әле яңыраҡ Өфөгә район ағинәйҙәре менән бергә "Евразия йөрәге" халыҡ-ара фестивале сиктәрендә үткәрелгән "Башҡорт милли кейеме көнө" сараһына килгәндә беҙҙе "Ете ҡыҙ" фонтаны бик һөйөндөрҙө, уның янында ял иттек, фотоға төштөк. Ә рухыбыҙ ҡәлебенә әүерелгән Салауат Юлаев майҙаны бөтөнләй танығыһыҙ булып матурланған. Ундағы амфитеатр бер юлы әллә нисәмә мең тамашасыны һыйҙыра ала икән. Һәм шуныһы ҡыуанныслы: ул ҡала халҡының ғына түгел, ҡунаҡтарҙың да яратҡан ял һәм күңел асыу урынына әүерелгән. Төрлө кимәлдәге мәҙәни саралар өфөләрҙә юғары музыкаль зауыҡ, йола һәм традицияларыбыҙға ҡарата ҡыҙыҡһыныу, уға ихтирам тойғоһо тәрбиәләй. Салауатыбыҙ һәйкәленең ана шундай юғары мәҙәни, дуҫлыҡ үҙәгенә әүерелеүе мине бик ҡыуандыра. Өфөләр ҙә баш ҡалабыҙ менән бергә үҙгәрә, матурлана бара кеүек тойолдо. Быны мин үҙем ошо юлы килгәндә уларҙың күҙҙәрендә, үҙ-үҙҙәрен тотошонда күрҙем: беҙҙең милли кейемдәргә һоҡланып, балаларын етәкләп, артыбыҙҙан Салауат һәйкәленә тиклем эйәреп килделәр. Сара Садиҡованың билдәле йыры һүҙҙәрен саҡ ҡына үҙгәртеп, Өфөнөң йәме уның кешеләре күҙҙәрендә лә сағыла, тип әйткем килә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ЯҠШЫ ХӘБӘР*

# ДӨРӨҪ ӨЛГӨ - ҺЕҘҘӘ...

**Мәскәү һәм Бөтә Рәсәй Патриархы Кирилл Башҡортостанда эш сәфәре менән булып китте.**

- Быуаттар дауамында Өфө һәм Башҡортостан бөтә илгә, донъяға Хоҙайға ышанған, әммә төрлө дин тотҡан кешеләрҙең бергә йәшәй, эшләй, бер-береһен хөрмәт итә, никахлаша, балалар тәрбиәләй алыуын күрһәтә алды. Бында мәҙәни, дини ыҙғыштар юҡлығын беләбеҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рус Православие сиркәүе башлығы республика Башлығы Рөстәм Хәмитов менән осрашыу ваҡытында. - Башҡортостанда иҡтисадтың нисек үҫешеүен, аҡсаның нисек һаҡсыл тотонолоуын күреү ҡыуанныслы булды. Мин Өфөнөң тышҡы күренешенә, юлдарҙың һәйбәт булыуына хайран ҡалдым. Баш ҡаланан алыҫтараҡ урынлашҡан райондарға барыу ҡош бейеклегенән тәбиғәттең матурлығы менән һоҡланырға мөмкинлек бирҙе...

Рәсәйҙең баш мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин менән осрашыуында ул: "Тап Башҡортостан ерендә осрашыу - һоҡланғыс мөмкинлек, - тип белдерҙе. - Юҡҡа ғына Екатерина бында Рәсәй исламы үҙәген төҙөмәгән. Дини-ара һәм милләт-ара мөнәсәбәттәр өсөн иң имен урын. Үткән йөҙ йыллыҡтар дауамында бында низағтар юҡ, иң яҡшы мөнәсәбәттәр һаҡлана. Иң мөһиме - Ватаныбыҙҙың берҙәмлеген, дини-ара, милләт-ара тыныслыҡ һаҡлайбыҙ. Беҙҙең дөйөм эшмәкәрлегебеҙ барлыҡ халыҡтарға ла дөрөҫ юл күрһәтеп торалыр тип уйлайым. Ә илдең бөйөклөгө уның иҡтисадында ғына түгел, кешеләрҙең рух көсөндә. Тотош Рәсәйҙә, Башҡортостандағы кеүек, православие һәм ислам йәмғиәттәре араһында дуҫтарса мөнәсәбәттәрҙе нығытырға кәрәк..."



12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# УЛДАРҘЫ АТАЙҺЫҘ ҮҪТЕРМӘЙЕК!

***Имза БИКТИМЕРОВ, ҡурайсы:*** Ир-аттарға төбәп әйтә торған һүҙем бар. Төрлө афәттәр арҡаһында быуаттар дауамында донъя тотҡаһы булырҙай, батыр, аҡыллы башҡорт уҙамандары, ғаилә башлыҡтары вафат булып торған. Әллә нисә быуын балалары атайһыҙ үҫеүгә дусар ителгән. Мәҫәлән, минең атайым Бөйөк Ватан һуғышы яраларынан мандымай, миңә бер йәш булғанда ғына үлеп киткән. Ярай әле, мине атайыбыҙ тәрбиәһен тойоп өлгөргән ағайымдар ҡарап үҫтерҙе. Мин уларҙан күреп, атай кеше шулай була икән, тигән өлгө алып, буй еткерҙем. Ә ғаиләһендә ир заттары булмаған, тик әсәй, өләсәй тәрбиәһе алып үҫкән малайҙарға барыбер ҙә ирлек сифаттары етешмәй. Балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып ҡатын-ҡыҙҙар ғына эшләй, мәктәптә ир-ат уҡытыусылар һирәк. Сит илдәрҙә, көнсығыш илдәрендә, киреһенсә, тәрбиә, белем усаҡтары булған өлкәләрҙә ир-егеттәр күп эшләй. Ғаиләлә лә атайҙарға ҙур роль бирелә уларҙа. Ғаиләнең ныҡ булыуы, ир баланың холоҡ-тәртибе, артабан ил тотҡаһы булырҙай лидер сифаттары атай тәрбиәһе алып үҫеүгә бәйле бит.

Бөгөн уңыш ҡаҙанған, аңлы, аҡыллы йәштәрҙең күбеһенең айыҡ тормошҡа, ғаилә именлегенә ынтылып йәшәүен беләм. Ғаиләләребеҙгә атай абруйы ҡайта хәҙер. Ғаиләлә бер маҡсат, уртаҡ уй-фекерҙәр менән йәшәһәләр, балалары ла иманлы, маҡсатҡа ынтылыусан булып үҫер, бындай тәрбиә алған йәштәр араһында берҙәмлек тә артыр. Ә был сифат беҙҙең милләт өсөн айырыуса кәрәкле икәнен мин әйтмәһәм дә белеп тораһығыҙҙыр.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *"Өфө ҡалаһы ни өсөн матур?" тигән һорауға әленән-әле яуап эҙләйбеҙ. Ә шулай ҙа, әйтегеҙ әле, уның матурлығын һеҙ ниҙә күрәһегеҙ?*

(Башы 1-се биттә).

***Марат ҒИЛМАНОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Йәштәр советы етәксеһе:*** Өфөбөҙҙөң матурлығын әйтеп, һанап та бөтөрлөк түгел. Ә шулай ҙа иң тәүҙә мин, Өфө бөйөк шәхестәре менән матур, тип әйтер инем. Баш ҡалабыҙ бик күп билдәле шәхестәр биргән илгә. Ләкин был осраҡта мин республиканан ситкә сығып китмәй, баш ҡалабыҙҙа йәшәгән һәм Башҡортостан мәнфәғәтендә бик күп файҙалы, изге ғәмәлдәре менән билдәле булған бөйөк шәхестәребеҙҙе күҙҙә тотоп әйтәм. Тарихта ла бихисап улар, бөгөнгө көндә лә бар. Өфө ҡалаһы донъяла тап ана улар исеме аша билдәлелек алған миҫалдар ҙа бик күп.

Йәштәре менән матур Өфөбөҙ. Күҙҙәре осҡонланып, халҡым, илем, тип янып йәшәгән, эшләгән, күңелле, файҙалы ял да итә белгән йәштәре йәм бирә баш ҡалабыҙға. Айырыуса туған телдә һөйләшеп, айыҡ сараларҙа ҡатнашып, матур ғаиләләр ҡороп, ишле балалар етәкләп йөрөп ятыусы, баш ҡаланы эше менән дә, рухы менән дә яулаған милләттәш йәштәребеҙ ҡыуандыра мине. Улар йылдан-йыл күбәйә бара.

Ҡунаҡсыллығы, ситтән килгәндәрҙе асыҡ йөҙ күрһәтеп ҡаршылай, хөрмәт итә белеүе менән матур Өфөбөҙ. Һуңғы ваҡыттарҙа ғына ла донъя, ил, Башҡортостан кимәлендә булып үткән һәр төрлө саралар ҙа быны раҫлай.

***Гөлнара МОРТАЗИНА, БДУ студенты:*** Рәсәй, сит ил ҡалаларында булғанда, уларҙың тарихи һәм иҫтәлекле урындарын фотоға төшөрөп алам. Һоҡланырлыҡ ерҙәр, ҙур-ҙур мегаполистар бик күп донъяла. Шуғалырмы, ҡайҙандыр йөрөп ҡайтһам, Өфөм бәләкәй генә булып тойола башлай, ә шулай ҙа тыуған ҡалам минең өсөн иң матуры, иң яҡыны, иң бейеге булып ҡала. Уны күрергә ашҡынып, һәр саҡ һағынып ҡайтам. Өфө иркен һәм яҡты ҡала. Йәшеллек күп, парктары матур. Ләкин бына шағир Назар Нәжми маҡтап йырлаған Өфө йүкәләре лә ҡартайҙы хәҙер, яңылары ултыртылһа ине. Йыл һайын мамыҡ осороп теңкәгә тейгән тирәктәр урынына йүкә, миләш, ҡайын, ылыҫ ағастары күберәк кәрәктер, тип уйлайым. Ғөмүмән, йәшеллектең тағы ла күберәк булыуын теләр инем, сөнки хәҙер транспорт сараларының ағыулыҡ ҡалдыҡтары ҡала һауаһын бик ныҡ бысрата. Беҙҙә шәхси еңел машиналар һаны арт-ҡандан-арта бара. Күптәр һаман да уны, үкенескә, етеш йәшәү, уңышлы кеше булыу билдәһе тип ҡабул итә. Ә бына ҡайһы бер яҡтарҙа, айырыуса, Ҡытай, Вьетнам ҡалаларында халыҡ экологик таҙа транспорт төрө - велосипедта йөрөүҙе өҫтөн күрә. Һаулыҡты нығытыу өсөн дә яҡшы сара, ағыулыҡ та талап ителмәй. Өфө ҡалаһының ҙур ҡалҡыулыҡта урынлашыуы һәм тирә-яҡтан Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары менән уратып алыныуы ғәжәп бер панорама хасил итә. Был айырыуса баш ҡаланың бейек бер нөктәһенән тороп ҡарағанда иҫ киткес күренеш - рәссам һүрәте һымаҡ булып күренә. Өфөмдөң матурлығы хаҡында бик күп йырҙар, шиғырҙар ижад ителгән. Миңә бигерәк тә Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең "Тыуған ҡалама йыр" шиғырындағы ошо юлдар бик оҡшай:

*Көмөш ҡайыш*
*быуған егет кеүек,*
*Ағиҙелде урап биленә,*
*Баҫҡанһың һин*
*Урал һаҡсыһылай,*
*Тыуған Өфөм минең,*
*баш ҡалам.*

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## КЕМ АЛЫҠ?



# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торғаныбыҙҙы беләһегеҙ.**

**Май айында гәзитебеҙгә яҙылғандар араһынан:**
Баймаҡ районы Ярат ауылынан Дилара Йәнбирҙина - **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**;

Учалы районы Миндәк ҡасабаһынан Ф. Тайфурова - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**;

Әбйәлил районы Буранғол ауылынан М. Хашимова - **"Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** китаптарын;

Учалы районы Муса ауылынан С. Фәхретдинова, Ишембай районы Биксән ауылынан М. Мөхәмәтрәхимова, Стәрлебаш районы Стәрлебаш ауылынан Ғәлиә Халиҡова, Йылайыр районы Исҡужа ауылынан Ғилмиә Усманова, Октябрьский ҡалаһынан А. Хасаева, Баймаҡ районы Шүлкә ауылынан Дилбәр Хәсәнова, Мәсетле районы Юныс ауылынан Айгиз Мөхәррәмов, Күгәрсен районы Теләүембәт ауылынан Риф Әбдрәхимов, Мәләүез районы Смаҡ ауылынан Ғәйнетдин Камалетдинов, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан А. Ҡусҡарова, Ейәнсура районы Яңы Павловка ауылынан Зөлиә Әлмөхәмәтова **"Матурлыҡ календары"н** аласаҡ.

Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер **"400 башҡорт халыҡ йыры"; "Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** китаптарын, шулай уҡ 5 уҡыусы **Мөнир Ҡунафиндың "Йөҙөп барған, ти, аттар диңгеҙҙә"**, 10 уҡыусы Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китабының яңыртылған һәм тулыландырылған вариантын, 10 уҡыусы 2017 йылға **"Башҡортса дини календарь"** алып ҡыуанасаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рус православие сиркәүе башлығы Башҡортостанға сәфәре ваҡытында Бөрө ҡалаһындағы Изге Троицк ҡатын-ҡыҙҙар монастыры ҡорамында булды. 1953-1954 йылдарҙа бында Изге Патриарх Кирилдың олатаһы Василий Степанович Гундяев дьякон булып хеҙмәт иткән. Рус православие сиркәүе башлығы шулай уҡ Благовещен районындағы ҙур булмаған Уса-Степановка ауылына ла барҙы. 60-сы йылдарҙа унда олатаһы Василий Гундяев Петропавловск сиркәүендә священник булған. Мәскәү һәм бөтә Рәсәй Патриархы Кирилл Өфөләге Богородица Раштыуаһы кафедраль соборын изгеләндерҙе.

✓Рус православие сиркәүе башлығы Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовты "Дан һәм хөрмәт" ордены менән бүләкләне. Был награда дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтарына, халыҡ-ара һәм хөкүмәт-ара ойошмаларҙың етәкселәренә, Сиркәү һәм конфессия башлыҡтарына, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренә сиркәү-ара һәм дин-ара хеҙмәттәшлеккә, халыҡтар араһында татыулыҡты һәм дуҫлыҡты нығытыу эшенә ҙур өлөш индергән өсөн тапшырыла. Орден кавалерҙары араһында Изге Патриарх Алексий II, Рәсәй Президенты Владимир Путин, Фидель Кастро, шәйхел-ислам Гаджи Аллахшукюр Паша-заде һәм Ҡаҙағстан Республикаһы Президенты Нурсолтан Назарбаев бар.

✓Өфөлә Рәсәй көнөн һәм Ҡала көнөн байрам итеү ун минутлыҡ салют менән тамамлана. Ҡаланың бөтә райондарында ла байрам саралары уҙғарыла, төп тамаша Ленин исемендәге майҙанда ойошторола. Бында балалар өсөн "Дуҫлыҡ каруселе" байрамы, театрлаштырылған тамаша, акциялар, концерт ҡаралған. Киске сәғәт 11-ҙә салют була. Байрамдар үҙ көсөбөҙ менән үткәрелә, тип билдәләнеләр мэрияла. Урындағы ижади коллективтарға үҙҙәрен күрһәтеү мөмкинлеге бирелә. Бер нисә йылдар элек ошондай сараларҙа саҡырылған йондоҙҙар сығыш яһай ине.

✓2016 йылдың 1 июленән хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме 7500 һум тәшкил итәсәк. Рәсәй Президенты Владимир Путин хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен арттырыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен арттырыу 1 миллион самаһы хеҙмәткәргә ҡағыла. Уларҙың 87 проценты - дәүләт һәм муниципаль учреждениеларҙа, 13 проценты иһә дәүләткә ҡарамаған иҡтисад секторында эшләй.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ҠАҒЫҘ БОЙОРОҠҠА - ҠАҒЫҘ ЯУАПТАР...

**"Киске Өфө" гәзите биттәрендә теге йәки был дауахана етәкселеге менән ҡыҫҡа әңгәмәләр йыш күҙгә салына. Уларҙы уҡып, медицинаның алға китеүенә ҡыуанырғамы, әллә, киреһенсә, ниндәй генә алға китеш тураһында һүҙ һөйләгәндә лә, йөктөң урынынан бер ҙә генә ҡуҙғалмауына әсенергәме икән, тип аптырайым.**



Эйе, йәш саҡта Хоҙай Тәғәлә биргән байлыҡҡа шатланып йәшәйһең. Һаулығыңа ни тиклем иғтибарлы булырға кәрәк икәнен уйламайһың да. Тәүҙә белем алып, һөнәргә эйә булырға ынтылаһың. Шунан, ғаилә ҡорғас, эшеңде дә эшләп өлгөрәһең, балалар үҫтерәһең. Табиптар, геронтологтар, кешегә ата-әсәһе биргән тәбиғи ресурстар 35 йәшкә тиклем генә етә, тип тә яҙа. Шуны белгәс, ниңә һуң беҙҙә сирҙәрҙе профилактикалау эше фәнни нигеҙгә ҡуйылып, әхлаҡи принциптарға таянып, тормошҡа ашырылмай? Быны дәүләт кимәлендә, тәғәйен закондар ярҙамында хәл итергә кәрәктер, бәлки? Йыл һайын диспансеризация ойошторалар, төрлө врачтарҙа тикшереүҙәр үткән булабыҙ. Тик ниңә диспансеризация мәлендә генә бындай тикшереүҙәр? Мәҫәлән, участка врачтары үҙ биләмәһендәге сирлеләрҙе даими контролдә тота, уларҙы йыл әйләнәһенә тикшереп тора алмаймы ни? Шулай иткәндә, мәҫәлән, йөрәк сирҙәренән йәш кенә көйөнсә яҡты донъянан китеүселәр һанын ҡырҡа кәметергә мөмкин булыр ине. Ысынында, участка врачтары грипп кеүек миҙгел сирҙәрен дауалаусы ролен генә үтәй булып сыға.

Мин үҙемдең миҫалымды килтереп үтәйем. 32 - 33 йәштә тәүләп йөрәктең хәле бөткәнен тоя башланым. АТФ уколдары ҡаҙаттым, муйын остеохондрозы, тип, физкабинетҡа процедураларға йөрөнөм. Йөрәк ат сапҡан кеүек ҡаға ине, һуңғараҡ, кireһенсә, яй ғына тибеп ҡаңғыртты. Мин быны ни өсөн яҙам? Тыуған Салауат районыбыҙҙың район үҙәге поликлиникаһында ла хатта эндокринолог буманы. Терапевт ошо яуаплы эшкә тәғәйенләнеп, сирлеләргә бер ниндәй ҙә файҙа килтермәй, врач-эндокринологтың "эш хаҡын алып" йөрөнө. Барһаң, муйынды тотҡолап ҡарай ҙа, "икенсе дәрәжәләге зоб" ти. Дауаланыу кәрәклеге, белгескә йүнәлтмә биреү тураһында һүҙ ҙә юҡ. Башҡортостан, ғөмүмән, йодҡа ҡытлыҡ кисереүсе төбәктәрҙең береһе. Быны медицина тирәһендә йөрөгәндәр яҡшы белә, эҙемтәләрен дә аңлайҙар. Ә ни өсөн халыҡҡа диңгеҙ аҙыҡ-түлеген ашауҙы ойоштороу, халыҡ медицинаһы алымдары, тәбиғи үҫемлектәр ҡулланыуҙың файҙаһын аңлатыу йәһәтенән ҡыл да ҡыбырлатмайҙар? Әрһеҙләшеп, Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына йүнәлтмә алдым. Әммә юлым уңманы, эндокринолог отпускыла ине. Бөгөн дә райондарҙан баш ҡала дауаханаларына йүнәлтмә алыу еңел тип уйламайым. Ошо ынтылыштарҙан һуң 25 йыл үткәс, Өфөгә эшкә килгәс, 2009 йылда ғына, диагноз ҡуйҙылар - гипотиреоз, йәғни ҡалҡан биҙе үҙаллы ТТГ гормонын эшләп сығара алмай. Күрһәткес тейешленән 4-5 тапҡырға артыҡ дәрәжәлә булып сыҡты. Россия-1 каналында барған "О главном" тапшырыуында күптән түгел, 2016 йылдың 18 майында, гипотиреоз ауырыуының иң насар күренеше ул - "мексидерматоз йөрәк" һәм "мексидерматоз тире", тинеләр. Тире йәмһеҙләнә, ҡорой, шыраулана (шершавая), тауыҡ һуҡырлығы күҙәтелә һ.б. Бына ни өсөн йөрәгем борсоған икән мине? Ниңә врач һаулығымды ваҡытында тикшереп, ваҡытында йүнәлтмә биреп, ярҙам итергә теләмәне! Был бит табиптарҙың изге бурысы, Гиппократтың "зыян килтермә" тигән өйрәтеүен ниңә оноталар? Белә-күрәләтә, аңлы рәүештә, минең ише күптәрҙе L-тироксин "энә"һенә ултырталар. Шул хәлгә ҡалдырмаҫ өсөн медицина нимә эшләне? Бармаҡҡа бармаҡ һуҡманы. Халыҡтың ашаған ашы ла сифат яғынан беҙ "планлаштырмаған" күп сирҙәргә алып килә. Ашҡаҙан-эсәк ауырыуы ғына түгел, аллергик һәм башҡа замана сирҙәренә дусар ителәбеҙ. Шунан, ваҡытында анығ диагноз ҡуйылһа, сирҙе дауалау ҙа тиҙерәк ойоштороla, тибеҙ. Ә ни өсөн МРТ үтеүҙе түләүһеҙ башҡарыу ойошторолмай? Түләү хаҡы бик ҡиммәт. МРТ-ны түләүһеҙ үтер өсөн сиратҡа баҫырға кәрәк, сиратҡа начмед йә поликлиника мөдире генә яҙа... Тик ул етәкселәргә лә сират аша ғына барып эләгәһең. Ни өсөн замана технологиялары индерелгән улай булғас? Сираттарҙы бөтөрөр өсөн, тиерһегеҙ. Ниндәйҙер белгес-табипҡа яҙылыу - оло бәлә. Ысын бюрократия тоҙағына эләгәһең...

Илебеҙ президенты В. В. Путиндың халыҡ менән һөйләшеүе алдынан, апрель айында, уға үҙемдең фекерҙәремде яҙып ебәргәйнем. Шулар араһында кеше һаулығын һаҡлауға етди ҡарап, профилактика эшен "кешесә" алып барыу мотлаҡ, тип әйткәйнем. Ләкин ул һорауҙарҙың ил башлығына барып етеүе бик икеле. Ә беҙҙә бөтөн мөһим мәсьәләләр "өҫтән" ҡағыҙ-бойороҡ буйынса төшөрөлә лә, ҡағыҙ-отчеттар ярҙамында тормошҡа ашырылып та ҡуя. Ә һөҙөмтә бармы-юҡмы - быныһы берәүҙе лә ҡыҙыҡһындырмай.

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТӘГҮР!

## ХОҠУҠТАРЫБЫҘ... ғәмәлдә тормошҡа ашһын!

**ҺОРАУ: Рәсәйҙең Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү көнө һеҙҙең өсөн ниндәй дата?**

***Гүзәл ВИЛДАНОВА, философия фәндәре докторы, Өфө ҡалаһы:*** Рәсәй көнө - сағыштырмаса яңы байрам. Ул Совет иле тарҡалып, Яңы Рәсәй барлыҡҡа килгәс индерелде. Шуғалырмы, иң ҙур байрам тип бөгөн дә баһаһы төшмәгән Еңеү байрамын һәм Совет иле тарҡалғандан һуң индерелһә лә, күңелгә яҡын дини байрамдарҙы ысын байрам тип ҡабул итәм. Әлбиттә, Рәсәйҙә йәшәгән һәр кеше үҙ иле, тарихы менән ғорурланырға тейеш. Бындай байрамдар тағы бер артыҡ ял, тип түгел, ә халыҡты берләштереүгә, ил яҙмышы тураһында уйландырыуға, халыҡтың хаҡ йәшәү ҡиммәттәрен аңлауына, сәләмәт тормош башлауына, донъяға ҡарашын дөрөҫ формалаштырыуға сәбәп итһә, шәп булыр ине.

***Михаил СЫТИН, Өфө ҡалаһы:*** Рәсәй империяһы тап башҡорттарҙың үҙ ирке менән Мәскәү кенәзлегенә ҡушылыуынан башлана. Петр Беренсе башҡорттар менән рустар башлаған эште тамамлап ҡына ҡуйҙы - Рәсәйҙе империя тип иғлан итеп, Европаға тәҙрә уйҙы, йәғни илде Европаға танытты - шул ғына. Был беҙҙең - башҡорттарҙың да иле. Калининградтан Сахалинғаса башҡорттар яҡламаған, төҙөмәгән, тергеҙмәгән бер генә саҡрым да юҡ. Йәшерәк сағымда Красноярскиҙа ла, Кубандә лә йәшәнем һәм эшләнем. Шуға күрә Рәсәй көнө минең өсөн илдең барлыҡҡа килеүен билдәләүсе нормаль көн. Балаларым да Рәсәй - уларҙың иле икәнен белә. Уларҙа был турала бер генә шик тә булырға тейеш түгел. Сафтарыбыҙҙа һаман йәшәгән "беҙҙе ҡыйырһыталар, беҙ бында иң бахыры", тигән фекерҙе тамырынан юҡҡа сығарырға кәрәк. Юҡҡа ғына башҡорт халыҡ мәҡәлендә: "Булыр илдең балаһы бер-береһенә "батыр" тиер, бөлөр илдең балаһы бер-береһенә "бахыр" тиер", тиелмәгән. Бахыр булмайыҡ, батыр булайыҡ, сөнки беҙ үҙебеҙ нигеҙ һалған илдә йәшәйбеҙ.

***Фәнил БҮЛӘКОВ, Учалы районының Иманғол ауыл хакимиәте башлығы:*** Рәсәй көнөн беҙҙең бөгөнгө федератив дәүләттең тыуған көнө кеүек ҡабул итәм. Ошо Ер шарының байтаҡ өлөшөн биләп торған, күп милләтле халыҡты бер ҡанат аҫтына туплаған илебеҙҙең, рус йә башҡорт, православный йә мосолмандарҙың айырым байрамы түгел, ә уртаҡ рәсми байрам. Көҙөн РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙар үтәсәк. Беҙ, Рәсәйҙең граждандары, ил етәкселәренең, парламент депутаттарының ябай халыҡтың мәнфәғәттәрен яҡлап, анығ эштәр башҡарыр тигән өмөттәбеҙ. Илебеҙгә һынауҙар төшөп тора. Илебеҙҙең ҡеүәте төп һынауҙарҙы үҙ иңендә күтәреүсе унын халҡында икәнен онотмаһаҡ, уларҙы власҡа кәрәк ваҡытта ғына иҫкә төшөрмәһәк ине. Шуға ла байрам уңайынан күп милләтле илебеҙҙә тыныслыҡ, халыҡтарҙың милли асылын һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге булыуын, Рәсәй Конституцияһында яҙылған кеше һәм граждан хоҡуҡтарының ғәмәлдә тормошҡа ашырылыуын теләйем.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓11 июндә Ҡырмыҫҡалы районы Тауһеңер ауылы янында тәүге тапҡыр "Уйын" халыҡ байрамы ойоштороla. Байрам 2020 йылда үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһы алдынан "URAL-FEST" проектының бер өлөшө булып тора. Әлеге проект Башҡортостан Башлығының 9 миллион һумлыҡ грантына лайыҡ булған. "Уйын" милли байрамында "Уҡ атыу", "Таш ырғытыу", "Ҡыҙ ҡыуыу" кеүек башҡорт халыҡ уйындарын тергеҙеү ҡаралған. Унда "Ылаҡ" милли уйыны ойоштороласаҡ, интерактив этнографик майҙансыҡтар: "Бүләктәр аллеяһы", солоҡсолоҡ майҙансығы, "Башҡорт йәйләүе", тирмәләр, халыҡ кәсептәре күргәҙмә-йәрминкәһе эшләйәсәк. "Уйын" байрамы иртәнге сәғәт 11-ҙә асыла.

✓Башҡорт йырсыһы, Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Марсель Ҡотоев "Жайыҡ DAUYSY" халыҡ-ара музыка фестивале лауреаты тип танылды. Ошо көндәрҙә Ҡаҙағстандың Атырау ҡалаһында конкурс тамамланды. Продюсер Зәлифә Барлыбаева хәбәр итеүенсә, бәйгелә Марсель Ҡотоев "Уралым" йырын һәм "Бабалар" исемле ҡаҙаҡ халыҡ йырын башҡарған. Конкурста Ҡаҙағстан, Рәсәй, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Украина вәкилдәре лә ҡатнашҡан.

✓11 июндә баш ҡалалағы Спорт һарайы алдында ауыл хужалығы йәрминкәһе ойоштороla. Йәрминкәлә баш ҡала халҡына һәм ҡунаҡтарына республика тауар һәм ауыл хужалығы етештереүселәре, дөйөм туҡланыу предприятиелары продукцияһы, шулай уҡ үҫентеләр тәҡдим ителә. Ҡағиҙә булараҡ, йәрминкәләрҙә аҙыҡ-түлеккә хаҡтар Өфөнөң сауҙа предприятиелары менән сағыштырғанда 10-15 процентҡа кәмерәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл баш ҡалала 22 ит йәрминкәһе ойошторолған, унда республиканың 49 районы үҙ продукцияһын тәҡдим иткән.

✓Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры коллективын яңы директор - Альберт Имаметдинов менән таныштырҙылар. Альберт Әлфрит улы Имаметдинов Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультетын тамамлаған. Санкт-Петербург театр сәнғәте академияһында ҡурсаҡ театры режиссураһы етәксеһе Николай Наумов курсында уҡыған. 2009 йылдан алып ҡуйыусы режиссер сифатында ҡурсаҡ театрында эшләй.

**“Башинформ”дан.**

*✓ Иҡтисадта көрсөк күренеше күҙәтелһә лә, Өфөнөң социаль-иҡтисади күрһәткесенең динамикаһы ыңғай. Бюджетҡа аҡсаның үҙ ваҡытында күсеүе ҡаланың тотороҡло үҫешен дәлилләгән күрһәткестәрҙең береһе булып тора.*



ҠЫҪҠАСА…

# КӘҢӘШМӘЛӘР, ТӨҘӨЛӨШТӘР...

✓ **17-18 июндә Өфөлә Рәсәй ҡалалары союзының IV иң яҡшы муниципаль ғәмәли-эштәре форумы үтәсәк.** Был юлы ул халыҡ-ара статусын аласаҡ - сараға сит ил муниципалитеттарынан коллегалар киләсәк. Форум секцияларының береһе халыҡ-ара мөнәсәбәттәргә, туғандаш ҡалалар араһында бәйләнештәр булдырыуға һәм Рәсәй ҡалаларының халыҡ-ара позицияларын үҫтереүгә арналасаҡ. Шулай уҡ форумда иң яҡшы тәжрибәләр бүләкләнәсәк. Әле интерактив картала тауыш биреү бара. Иң күп тауыш йыйыусы авторҙар форумға ҡунаҡ рәүешендә саҡырыласаҡ.

✓ **Өфөнөң Аврора урамында урынлашҡан Республика перинаталь үҙәгенең яңы корпусы 98 процентҡа әҙер.** Медицина учреждениеһын дәүләт милкенә тапшырыу мәсьәләләре буйынса ошо көндәрҙә күсмә кәңәшмә үтте. Кәңәшмә эшендә Башҡортостан буйынса Баш федераль инспектор Андрей Чечеватов ҡатнашты. "Проект буйынса, клиникала йөклөлөк патологияһы, яңы һәм етлекмәй тыуған сабыйҙар патологияһы, акушерлыҡ, физиология һәм гинекология бүлектәре буласаҡ. Стационар республика перинаталь үҙәге структураһында һәм 130 койкаға иҫәпләнгән. Объекттың сметала ҡаралған хаҡы - ике миллиард һумдан ашыу. Финанслау Башҡортостан Хөкүмәте, Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәм Мотлаҡ медицина страховкалау фонды араһында ҡул ҡуйылған килешеү сиктәрендә тәьмин ителә", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан буйынса Баш федераль инспектор аппаратының матбуғат хеҙмәтендә.

✓ **Донъяның күп ҡалаларында күләмле граффитиҙар ҡала биҙәге генә түгел, уларға айырым социаль функциялар ҙа йөкмәтелгән - халыҡҡа кешелектең нигеҙ ҡиммәттәрен иҫкә төшөрөп торалар һәм һынлы сәнғәтте популярлаштыралар.** Бөгөн граффитиҙы рәссамдарҙың урамдағы шөғөлө тип түгел, ә сәнғәт тип баһалайҙар. 2012-2015 йылдарҙа Өфөлә ҡала биналарының фасадын биҙәү буйынса бер нисә ҙур проект тормошҡа ашырылды. Улар халыҡта һәм матбуғатта ыңғай фекер тыуҙырҙы. Ә маршал Жуковтың Һупайлы биҫтәһендәге портреты ҡалала ғына түгел, донъялағы иң ҙур портреты булараҡ танылыу тапты. Шулай итеп, Башҡортостандың баш ҡалаһы үҙенсәлекле урам арт-объекттары менән дан алды. 2015 йыл һуңында "Өфө төҫтәр палитраһында" тип аталған яңы проект тормошҡа ашырыла башланы. Әлегә тиклем үҙенсәлекле эскиздарҙы уйлау, улар буйынса килешеү, йорт фасадтарын һайлау, бағыусылар менән һөйләшеүҙәр алып барылған. Стенаға төшөрөләсәк һүрәттәрҙең тематикаһы киң - мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт, тарих, ғаилә, бала саҡ, спорт, илһөйәрлек, тәбиғәт, гуманизм, изгелек, дуҫлыҡ, мөхәббәт, тыныслыҡ, милләт-ара татыулыҡ. Эш барышында ике тиҫтә самаһы йорт фасады һайлап алынған. 5 июнь кисендә Цюрупа урамы, 83 адресы буйынса урынлашҡан йортҡа беренсе һүрәт төшөрөлә башлаған да инде. Һауа торошо ыңғай булған хәлдә, эште Ҡала көнөнә тамамлау планлаштырыла.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МАТУР ҮҘГӘРЕШТӘРГӘ...

## өйрәнеп тә бөткән халыҡ



**Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө 12 июндә өс иҫтәлекле датаға - башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың тыуыуына - 262 йыл, Өфө ҡәлғәһе төҙөлөүгә - 442 йыл тулыуға һәм Рәсәй көнөнә арналған байрам саралары уҙғарырға әҙерләнә. Йола буйынса, ошо саралар алдынан Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек ЯЛАЛОВ журналистар менән осрашты һәм быйылғы йыл башынан алып барылған эштәр, яуланған уңыштар, хәл итеү талап иткән мәсьәләләр менән таныштырҙы.**

- Тәүге ярты йыллыҡ тамамланмағанға күрә, Өфө ҡалаһының социаль-иҡтисади күрһәткестәре буйынса әлегә отчеттар юҡ, - тип башлап китте һүҙен Ирек Ишмөхәмәт улы. - Шуға, быйылғы биш айлыҡ статистик, оператив мәғлүмәттәрҙе генә киң йәмәғәтселек иғтибарына тәҡдим итмәксебеҙ. Иҡтисадта көрсөк күренеше күҙәтелһә лә, Өфөнөң 2015 һәм 2016 йыл башындағы социаль-иҡтисади күрһәткесенең динамикаһы ыңғай. Бюджетҡа аҡсаның үҙ ваҡытында күсеүе ҡаланың тотороҡло үҫешен дәлилләгән күрһәткестәрҙең береһе булып тора. Бюджеттың килемле өлөшөн атҡарып сығыу ярайһы уҡ ҡыйынға төшөүе беҙҙе бик ҡаты экономиялау режимында эшләргә мәжбүр итә. Экономиялауҙы үҙебеҙҙән башланыҡ: хеҙмәт командировкаларына, кеҫә телефоны бәйләнешенә, яғыулыҡ-майлау материалдарына киткән сығымдарҙы аҙайттыҡ. Беҙҙең муниципаль предприятиелар һәм учреждениелар ҙа сығымдарҙы кәметеү пландарын төҙөнө. Әйткәндәй, эште еренә еткереп эшләһәң, уңыш оҙаҡ көттөрмәй. Яңыраҡ Өфө РФ Федераль Йыйылышы Федерация Советы ҡатнашлығында ойошторолған "Йәмәғәт финанстары идараһы буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы муниципаль берәмеге" тип исемләнгән туғыҙынсы Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашып, призлы урын яуланы. Был хәл, һис шикһеҙ, ҡала хакимиәтенең финанстар менән һөҙөмтәле файҙаланыуы тураһында һөйләй. Ҡайһы бер белемһеҙ "белгес"тәр Өфөнөң бөгөнгө хәленә дөрөҫ булмаған баһа биреп ҡуя ул ҡуйыуын. Ундайҙарға, мәсьәләне яҡшылап өйрәнмәй тороп, теге йәки был хәл-күренешкә ҡабалан баһалар яһамай торорға кәңәш итер инем. Бына бит, Standart & Poors халыҡ-ара рейтинг агентлығы ла Өфөнөң финанс күрһәткестәренең яҡшырыуын иҫәпкә алып, үҫеш тенденцияһына "Тотороҡло" тигән билдә ҡуйҙы.

Артабан Өфө ҡала хакимиәте башлығы сәнәғәт хәлдәре менән таныштырҙы. Быйылғы 4 ай эсендә баш ҡала предприятиеларында сәнәғәт етештереү индексы 101 процент сиген үткән. Был күрһәткес былтырғыһы менән тап килә. Өфө ойошмаларының йыл башындағы финанс хәле лә былтырғы менән сағыштырғанда яҡшырған. Уртаса айлыҡ эш хаҡы 34,5 мең һум тәшкил итә, был 2015 йылдың ғинуар-март айҙарынан 5,9 процентҡа күберәк. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡтың ҡала иҡтисадына индергән өлөшө йылдан-йыл арта. Быйыл ҡала хакимиәте тарафынан кәмендә 100 бәләкәй эшҡыуарлыҡ

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭКОЛОГТАР КӘҢӘШ ҠОРА



**"ВДНХ-ЭКСПО" күргәҙмә комплексында Халыҡ-ара экологик форумды һәм "Экология. Технологиялар. Тормош" тип аталған махсуслаштырылған күргәҙмәне берләштереүсе беренсе экология фестивале үтте.**

Был проект төбәктә тормоштоң яңы сифатын үҫтереүгә этәргес биреп, бизнестың һәм йәмәғәтселектең экологик мәҙәниәтен үҫтереүҙе стимулларға тейеш. Форум тәбиғәт менән файҙаланыу, шул иҫәптән тирә-яҡ мөхитте, экологик хәүефһеҙлекте һаҡлау кеүек мөһим мәсьәләләрҙе берләштерҙе. Форум сиктәрендә 50-нән ашыу сара: сәнәғәт, төҙөлөш, АПК, ТЭК, туризм һ.б. өлкәләрҙә экология буйынса түңәрәк ҡорҙар һәм бәхәстәр, башҡа саралар ойошторолдо. "Экоҡала" секцияһы эше сиктәрендә "Ҡалаларҙың экологик проблемалары" темаһына сессия үтте. Унда Өфөнөң мегаполистың экологик хәүефһеҙлеге буйынса программаны үтәүҙә туранан-тура ҡатнашыусы муниципаль предприятиелары ҡатнашты. Күргәҙмә экспозицияһы 11 йүнәлеште сағылдырҙы. Унда эшмәкәрлектәренә яңы экологик стандарттар индереүсе сәнәғәт гиганттары менән бер рәттән, яңы экологик тауарҙар һәм хеҙмәттәр эшләүселәр ҙә ҡатнашты, шулай уҡ экокосметика, экотуҡланыу һ.б. бик күп хеҙмәттәр тәҡдим ителде, теләүселәр өсөн оҫталыҡ дәрестәре һәм семинарҙар ойошторолдо.

# МӘЖБҮРЛӘМӘЙ БУЛМАЙ...



**Башҡортостандың баш ҡалаһында суд приставтарының VII Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы үтте.**

Унда донъяның 20 иленән 100-ҙән ашыу кеше ҡатнашты, шулай уҡ башҡарма производство өлкәһендәге алдынғы Рәсәй һәм сит ил, атап әйт-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ 8 июндән хәүефле йөрөтөү тураһында Юл хәрәкәте ҡағиҙәләренә төҙәтмәләр үҙ көсөнә инде. Рәсәй Хөкүмәте ҡарарында "хәүефле йөрөтөү" терминына аңлатма бирелгән. Тейешле урындарҙа башҡа автомобилдәргә юл бирмәү, ҡапыл әкренәйеү, хәүефһеҙ дистанцияны тотмау кеүек күренештәр машина менән хәүефле идара итеү тип иҫәпләнә ала, тиелә унда. Алдараҡ хоҡуҡ боҙоусыларға биш мең һум штраф һалыу ҡаралғайны. Штраф күләме тураһында аныҡ ҡарар көҙ көнө ҡабул ителә.

✓ Башҡортостан Fitch Ratings халыҡ-ара рейтинг агентлығының "AA+(rus)" кимәлендәге оҙайлы кредит рейтингына эйә булды, рейтинг буйынса прогноз - "Тотороҡло". Милли шкала буйынса рейтинг республикаға тәүге тапҡыр бирелде. Fitch Ratings рейтингы кимәле буйынса Башҡортостан Мәскәү, Санкт-Петербург, Ханты-Манси автономиялы округы, Татарстан, Саха (Яҡут) Республикаһы, Новосибирск, Силәбе, Ленинград һәм Төмән өлкәләре менән бергә илдең тәүге ун төбәге иҫәбенә инә.

✓ Өфөлә "рәсми" вакансияларҙың күпселегендә хеҙмәт хаҡы 15-20 мең һум тәшкил итә. Мәҫәлән, 12,7 мең вакантлы урындарҙың 3,7 меңдән ашыуында хеҙмәт хаҡы - 15-20 мең, 3,1 мең буш эш урындарында 20 мең һумдан ашыурак. Меңгә яҡын вакансия 8-10 мең һум күләмендәге эш хаҡын күҙ уңында тота. Тағы ла 500-ҙән ашыу буш эш урынында айына 6,9-8 мең һумлыҡ хеҙмәт хаҡы вәғәҙәләйҙәр. Йәйге каникулдар ваҡытында уҡыусылар һәм студенттар өсөн эш урындарын иҫәпкә алып, 1,5 мең самаһы вакансия 6,9 мең һумдан артмаған хеҙмәт хаҡына тура килә, тип хәбәр иттеләр Өфөләге халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә.

✓ "Башнефть" автозаправкалау станцияларында бензиндың бер литры 50 тингә, йәки уртаса 1,4 процентҡа ҡимәтләнде. Хәҙер "Нормаль-80" бензинының бер литры 32,80 һум тәшкил итә, "Регуляр-92" - 33,80, АТUM-92 - 34,30, "Премиум-95" - 37,10, АТUM-95 - 37,60, "Премиум-98" 40,10 һум тора. Дизель яғыулығына хаҡ үҙгәрмәгән. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: хаҡтарҙың үҙгәреүенә ҡарамаҫтан, "Башнефть" әүәлгесә яғыулыҡтың иң кәрәкле маркаларына хаҡты уртаса кимәлдә һаҡлап килә. Бынан тыш, 1 июндән 31 июлгә тиклем компанияның барлыҡ автозаправкалау станцияларында 25 литрҙан күберәк яғыулыҡ һатып алғанда бер литр өсөн өс процент күләмендә ташлама яһала.

✓ **Өфө һуңғы йылдарҙа юлдарҙы асфальтлауҙың да яңы, заманса ысулдарын әүҙем файҙалана. Минеңсә, элеккесә эшләү ярамай хәҙер: иң мөһиме - асфальт юл файҙаланыу ваҡытына тура килерлек итеп һалынырға тейеш.**



предприятиеһына ярҙам итеү планға индерелгән, 300 эш урыны һаҡлап ҡалынған, 100 яңы эш урыны булдырылған.

Төҙөлөш тармағындағы эштәргә лә туҡталды Өфө ҡала хакимиәте башлығы. Дүрт айҙа 150 мең квадрат метрлыҡ торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. "Был былтырғы күрһәткестәрҙән 8 процентҡа күберәк", - тине Ирек Ялалов. Бынан тыш, ул Өфө ҡалаһы тарихында беренсе тапҡыр бер юлы дүрт мәктәп төҙөлә башлауы тураһында ла белдерҙе. Мәктәптәр Нуғай ҡасабаһында (825 урынлыҡ), "Инорс-4" (1650 - уҡыусыға һәм 340 мәктәпкәсә йәштәге балаға иҫәпләнгән), "Колгуевский" (550 урынлыҡ) һәм "Дим-8" (850 урынлыҡ) биҫтәләрендә төҙөлә. "Был - ябай мәктәптәр түгел, улар комплекслы белем биреү учреждениелары. Йәғни, балалар баҡсаһы ла, спортзал да бер үк урында урынлашҡанлыҡтан, баҡсанан мәктәпкә күскән балаларға яңы мөхиткә өйрәнергә кәрәкмәй - улар шул уҡ урында уҡыуын дауам итә. Был тәжрибәне беҙ Ҡытай Халыҡ республикаһынан алып ҡайттыҡ", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

Өфө ҡалаһы, Мәскәү менән Санкт-Петербургтан ҡала, илдәге халыҡ-ара кимәлдәге саралар ойоштороусы өсөнсө майҙансыҡҡа әүерелә бара. "Был һуңғы йылдарҙағы ҡалалар әүҙемлеге статистикаһынан да күренә", - тине Ирек Ялалов. Йәғни, көрсөк тәьҫире ҡаланың ошо йүнәлештәге хәрәкәтенә ҡамасауламай, тигән һүҙ. Көрсөк шарттарында аҙ аҡса тотоноп, һөҙөмтәле эш эшләү сәбәбен Ирек Ялалов торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәренең үҙ эшенең оҫталары булыуына һәм ойоштороуҙағы уңыштар менән бәйләй. 2015-2016 йылылыҡ биреү осоро уңышлы үтелгән. Был юлы йылылыҡ биреү селтәрендә авариялар былтырғынан 119 осраҡҡа аҙыраҡ булған. "Был - Өфө ҡалаһында ғына алып барылған уникаль тәжрибә - иҫке торбаларҙы алыштырыу эшенең ҡыш миҙгелендә лә туҡталмауында. Унан бигерәк, беҙҙә был эште атҡарған саҡта селтәрҙә алыштырыласаҡ торба эшен ваҡытлыса һалынған торбалар, параллель юлдар дауам итә. Ремонт эштәрен йыл әйләнәһенә алып барыуыбыҙ арҡаһында ла авариялар кәмей", - тип аңлатты Ирек Ялалов.

Тағы. Өфө һуңғы йылдарҙа юлдарҙы асфальтлауҙың да яңы, заманса ысулдарын әүҙем файҙалана. "Кемдер беҙгә, ҡала урамдарына йәһәт-йәһәт кенә итеп бер ҡат асфальт һалып, ҡотолорға кәңәш итә. Ул кәңәш дөрөҫ түгел. Минеңсә, элеккесә эшләү ярамай хәҙер: иң мөһиме - асфальт юл файҙаланыу ваҡытына тура килерлек итеп һалынырға тейеш. Юғиһә, юл һалыуҙы йомғаҡлаған йылда асфальтты махсус юл лабораторияһы тикшерһә, ул бөтөн талаптарға ла яуап бирә, ә бер йылдан һуң шул урындағы асфальттың ныҡ иҫкергән, таушалған булыуы асыҡлана. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, беҙҙә асфальт йәйгәндә ҡатнашманы йәбешкәк итеү өсөн ҡулланылған битум сифатлы түгел. Беҙҙә битум эшләүсе ике компания бар, әммә уларҙың тауарҙары бер йылдан һуң төп тәғәйенләнешен үтәмәй - йәбешмәй башлай. Ямғыр һыуын юлдан ситкә ағыҙыу өсөн тәғәйенләнгән яһалма йырындар (ливневики) мәсьәләһенә лә айырым иғтибар бирелә. Улар булмай тороп, асфальт юлдарҙың оҙаҡ хеҙмәтләндереүенә өлгәшеп булмай. Беҙҙең ҡалаларҙы шул йырындарһыҙ ғына проектлағандар, хәҙер беҙ элекке хатаны төҙәтәбеҙ ҙә инде. Ошо йүнәлештә алып барылған эштәр һөҙөмтәһендә Һупайлы биҫтәһе һыу баҫыу ҡурҡынысынан арынды", - тип, юл төҙөлөшөнә лә туҡталды баш ҡала хакимиәте башлығы.

Осрашыу барышында бик күп уңыштар тураһында әйтелде, улар тураһында гәзитебеҙ биттәрендә әленән-әле яҙып торабыҙ. Өфөлә үҙгәрештәргә өйрәнеп тә бөтөлгән инде. Әле бына яңыраҡ ҡына һәр светофор эргәһенә, тротуарҙарҙың йүнәлешен күрһәтеп ятҡан буйлы-төртөклө ҡыҙыл таҡталарҙы күреп, "Был ни ғәләмәт!" тип аптырап йөрөнөк. Уйлана торғас, уларҙың һуҡырҙар өсөн эшләнгәнлеген аңлап ҡалдыҡ. Өфө ҡалаһы мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙең хәүефһеҙлеген дә ҡайғырта, тимәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ирек Ялаловтың һөйләгәндәрен тыңлағандан һуң, ҡырмыҫҡа иләүе һымаҡ мыжғып торған мегаполистың тормошо шул тиклем ентекле уйланылған, аҡыллы кешеләр тарафынан контролдә тотолған ғәйәт ҙур бер система икәнлегенә тағы бер ҡат инандыҡ. Ирек Ишмөхәмәт улының: "Тынғыһыҙ эшләргә тура килә. Минең һәм коллегаларымдың шәмбе һәм йәкшәмбе көндәребеҙ бөтөнләй тиерлек юҡ. Бындай тиҙлек, эшсәнлек артабан да дауам итһә, Өфө ҡала түгел, ә әкиәткә әйләнәсәк тиҙҙән", - тиеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй бит.**

**Байым РӘХИМЙӘНОВ.**

# ЭСКЕ ТУРИЗМ - КӨН ТАЛАБЫ

**Өфөлә Рус география йәмғиәте Төбәктәр советының II күсмә ултырышы булды. Унда Рус география йәмғиәтенең беренсе вице-президенты Артур Чилингаров ҡатнашты.**

...кәндә, Германия, Финляндия, Сербия, Словакия, Венгрия, Болгария, Румыния, Чехия, Черногория, Иран, Ҡытай, Таиланд, Монголия, Беларусь, Әрмәнстан, Вьетнам, Латвия, Эстония, Молдова, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Әзербайжан белгестәре ҡатнашты. Конференцияла төп маҡсаты мәжбүри башҡарыу системаһын модернизациялау булған башҡарма производство институтын үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды. Ҡатнашыусылар хоҡуҡ ҡулланыу тәжрибәһе менән танышты, төрлө мәжбүри башҡарыу системалары, бурыслыларға яңы йоғонто яһау саралары индереүҙең маҡсатҡа ярашлылығы, шулай уҡ мәжбүри башҡарыуҙың әле индерелгән алымдарының һөҙөмтәләлеге буйынса фекер алышты. Рәсми өлөштән тыш, ҡунаҡтар Башҡортостандың тарихи һәм иҫтәлекле урындары менән танышты.

Сараға шулай уҡ Төбәктәр советы ағзалары Адыгей, Ҡырым, Татарстан, Яҡутстан, Краснодар крайы, Нижегород, Пенза, Һамар, Томск, Силәбе өлкәләренән һәм илдең башҡа төбәктәренән вәкилдәр килде.

Рус география йәмғиәтенең Башҡортостан төбәк бүлексәһе 1954 йылда ойошторолған. Эске туризм өсөн шарттар тыуҙырыу, яңы маршруттар асыу, ошо өлкәгә инвесторҙар йәлеп итеү - уның эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлештәре иҫәбендә. Яҙыусы һәм сәйәхәтсе Камил Йыһаншин - 2014 йылдан алып бүлексәнең рәйесе.

Ултырыш барышында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов менән Артур Чилингаров Башҡортостан һәм Рус география йәмғиәте араһында үҙ-ара эш итеү тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Документ географияны һәм уға оҡшаш фәндәрҙе өйрәнеүгә, ғилми, экологик, социаль, белем биреү, мәҙәни һәм башҡа программаларҙы, проекттарҙы тормошҡа ашырыу юлы менән Башҡортостанды үҫтереүгә, тыуған төйәккә, уның тарихына һәм тәбиғәтенә һөйөү һәм һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләүгә булышлыҡ итеүгә йүнәлтелгән.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# УҠЫУСЫЛАР БАР ӘЛЕ...

**14 июндә Башҡортостан матбуғаты көнө билдәләнә. Ошо уңайҙан уҡыусыларыбыҙға "Башҡорт матбуғат баҫмаларын уҡыйһыңмы, ни өсөн уҡыйһың?" тигән һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

***Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА, "Тамыр" телеканалы мөхәррире:*** Бала сағымдағы сағыу хәтирәләремдең береһе - "Башҡортостан пионеры" гәзитендә сыҡҡан иң тәүге шиғырымдыр, моғайын. О, ул ваҡыттағы минең шатлығымды күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын! Шул тиклем иҫ китмәле ҙур һөйөнөс ине ул! Ошо иҫтәлекле көндән алып миңә гәзит-журналдарға һөйөү, уҡыу ене ҡағылды, тиһәм дә була. Атайым менән әсәйем һәр ваҡыт башҡорт телендә нәшер ителгән "Башҡортостан пионеры", "Совет Башҡортостаны", "Хеҙмәткә дан" гәзиттәренә, "Башҡортостан ҡыҙы", "Пионер" журналдарына һ.б. яҙыла торғайны. Аҙағыраҡ "Йәшлек", "Киске Өфө", "Аҙна" гәзиттәрен, "Аҡбуҙат" журналын алдыра башланыҡ. Кистәрен бөтәбеҙ ҙә йыйылышып, әле генә почта йәшнигенән алған гәзиттәрҙе ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыйбыҙ. Берәй шәп кенә хикәйә баҫылһа, шуны көтөп алып уҡыуы - үҙе байрам була торғайны. Гәзит-журнал уҡымаған кешене бөтөнләй аңламайым - нисек үҙенде шундай рухи ләззәт алыуҙан мәхрүм итергә була! Әлеге көндә лә өйөмдән гәзит-журнал өҙөлмәй. Улдарым бәләкәйҙән "Аҡбуҙат" журналын уҡып үҫһәләр, әле "Аманат"ты уҡыйҙар. Бөгөн "Шоңҡар", "Башҡортостан ҡыҙы" журналдары, "Киске Өфө", "Йәшлек", "Башҡортостан" гәзиттәре - яратҡан баҫмаларым. Шул уҡ ваҡытта, төрлө тапшырыуҙар эшләгәндә лә кәрәкле мәғлүмәтте алыҫтан эҙләргә кәрәкмәй - бына ята, тот та уҡы. Әлбиттә, хәҙерге интернет заманында ҡағыҙ баҫмалар уҡылмай, тигән кешеләр бар ул. Минеңсә, төптө дөрөҫ һүҙ түгел. Уҡыйым, тигән кеше барыбер уҡыясаҡ, үҙенең артынан башҡаларҙы ла эйәртәсәк.

***Әлиә ИШБУЛДИНА, Янғантау урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Мин башҡорт телендә нәшер ителгән милли баҫмаларҙы уҡырға яратам. Үҙемде белгәндән бирле районыбыҙҙа сыҡҡан "Йүрүҙән", "На земле Салавата" гәзиттәренә яҙылам, сөнки унда яңылыҡтар, район тормошо яҡтыртыла. "Башҡортостан", "Киске Өфө" гәзиттәрендә республика яңылыҡтары, яңы әҫәрҙәрҙән өҙөктәр баҫыла. "Киске Өфө"лә халҡыбыҙҙың тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре, дини йолалар, тәрбиәүи мәсьәләләр һәм һәр кешене ҡыҙыҡһындырған бөтә һорауҙарға ла яуап табырға була. Уҡытыусы булараҡ, ошо гәзиттәге фәһемле фекерҙәр менән уҡыусыларҙы, ата-әсәләрҙе таныштырам. "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналына ла утыҙ йылдан артыҡ яҙылам һәм эшемдә ҡулланам. Ғөмүмән, гәзит-журналдарҙың килгәнен көтөп алам. Беҙҙең республикала, районыбыҙҙа сыҡҡан милли баҫмалар һәр кешенең күңеленә яҡындыр. Улар һәр кемдең күңел торошо, йәшәү рәүеше булырға тейеш, тип уйлайым.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Үҙәк көйгәндә

❖ Ашҡаҙандың әселеге юғары булыу һөҙөмтәһендә үҙәк көйһә, даими рәүештә бөтнөклө (мята) сәй эсегеҙ.

❖ 1 өлөш әнис орлоғо, 2-шәр өлөш бөтнөк, меңъяпраҡ, һары мәтрүшкә үләнен ҡушып, уны сәй итеп эсергә.

❖ Ашҡаҙандың әселеге түбән булһа, 1 өлөш ҡомалаҡ тубырсыҡтары, 2-шәр өлөш бөтнөк, аҡ сәскә үләне, әнис орлоғо, ирәүән тамыры (валериана лекарственная) алып, иртәнсәк 1 балғалаҡ ошо ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һыуҙа 15 минут төнәтеп, һөҙөп, эсергә. Бөтөн төнәтмәләрҙе лә 2-3 ай буйы эсергә.

## Радикулит

❖ Билгә яртылаш һыу менән иҙелгән керән (хрен) һутын һөртөргә, йөн туҡыма менән урарға.

❖ Дегәнәк япрағын һалҡын һыу менән сайып, аҫҡы өлөшө менән билгә бәйләргә. Һыҙланыу бөткәнсе дауаланырға.

❖ Каштан емештәрен иҙергә һәм малдың эс майына ҡушып болғатып, ҡара икмәккә йоҡа ғына итеп һылап, билгә ҡуйырға.

## Пародонтоз

❖ 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкә сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә, һөҙөргә һәм ауыҙ ҡыуышлығын сайырға. Көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

## Иммунитет

❖ Иммунитетты нығытыу өсөн көнөнә 2 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ татлы тамыр сиробы эсергә (дарыуханала һатыла). Бер стакан һыуға иҙеп эсәләр. Дауаланыу курсы - 7-10 көн.

## Йоҡоһоҙлоҡ

❖ Йоҡлар алдынан 0,5-1 стакан һөткә 1 балғалаҡ бал өҫтәп эсергә.

❖ Киске ашҡа бер киҫәк күркә ите ашау ҙа яҡшы йоҡлата.

❖ Картуф углеводатарҙан ғына тора, тиһәләр ҙә, киске аш мәлендә картуф иҙмәһе ашау шулай уҡ йоҡлап китергә ярҙам итә. Иҙмәгә һөт ҡушырға кәрәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Ни өсөн тап 20-се ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусылары өлөшөнә төшкән был бәхет? Был һорауға Вячеслав Швайко мотлаҡ: "Башҡорт телен белгән балалар инглиз телен яҡшыраҡ, еңелерәк үҙләштерә", - тигән яуап бирәсәк.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*

## БАЛА ТЕЛӘҮ

Киленгә теләк теләгәндә йәки игелеге өсөн фатиха биргәндә, былай тиҙәр:

*Ал итәгеңде бала баҫһын,*
*Арт итәгеңде мал баҫһын!*
*Бала-сағаң күп булһын,*
*Берәү түгел, йөп булһын,*
*Берәү түгел, йөп булһын да*
*Алдың тулы б...ҡ булһын!*
*Йүгерә-йүгерә йөклө бул,*
*Бәпәйләгәс, һөтлө бул!*
*Ир бала тап,*
*Иркенләп ят!*

## БАЛА ҠАРШЫЛАУ

Элек баланы өйҙә тапҡандар. Кендек инәйҙәре баланың кендеген атаһының йәки берәй күркәм ир кешенең аяҡ кейеменән һалып ҡырҡҡан. Имеш, бала шул аяҡ кейеме хужаһына оҡшап көслө, матур, батыр була. Йәш бала менән әсә янына берәүҙе лә индермәйҙәр. Атай кеше, тупһа аша үтмәй генә, кендек инәһенә күлдәк әйтә. Аҙаҡ килгән кешеләр балаға бүләк индереп: "Ата-инәһенә иш булһын! Матур, батыр булһын!"- тип теләктәр әйтеп сығалар.

Йөҙләк (битлек) менән тыуһа, бала бәхетле була. Ир бала йөҙләк менән тыуһа, йөҙләгән яғаһына тегеп ҡуйғандар.

Тәүге һөттө мейес ҡултығына һалалар. Баланың ҡарын сәсен, киптереп, сәңгелдәгенә тағалар.

Хужаһының йортонда ҡыҙ бала тыуғанды эт яратмай, ти: "Ҡыҙ тыуҙы. Миңә ит ҡалдырмай, үҙе ашап бөтә инде!", - тип әйтә, ти. Шуға ир бала тыуһа: "Их ҡына! Малай тыуҙы! Миңә лә итен кимерерлек һөйәк ҡалдырасаҡ!" - тип ҡыуана, ти. Ир бала донъяға килгәндә, тау-таш тетрәп торор, ти: "Ах, беҙҙең йөрәкте яра бит был!"- тип әйтер, ти.

Тыуған көнөндә үк баланы әсәһе менән бергә мунсаға алып баралар. Сабыйҙы йыуындырғанда, кендек инәһе шулай тип һамаҡлай:

*- Бәхетле, тәүфиҡлы бул,*
*Татлы телле бул!*
*Мунса ташы,*
*Бүрәнә башы,*
*Таштай, ныҡ бул,*
*Бүрәнәләй бүкән бул!*
*Аталы-инәле,*
*Алтын ҡанатлы,*
*Һүҙҙәрең өҫтөн,*
*Йөҙҙәрең күркәм,*
*Ҡулдарың эшсән булһын!*

Шулай тип сайындырғандан һуң: "Су-у-уп!" - тип, сабыйҙың һырт буйынан аҡҡан һыуҙы ирендәре менән аҫтан өҫкә ҡарай һыпырып алып, ситкә төкөрә (Шуны бала арҡаһынан йөн алыу тиҙәр. Йәнәһе, баланың арҡаһы йөнлө була, уны "Бала йөнө" тиҙәр). Шунан әсәһенең һөтө менән баланың тәнен һыпыра.

Сабыйҙы тәүге йыуындырғанда, йыуынтыға ете бөртөк тары һалалар. Икенсе йыуындырғанда - туғыҙ, унан - ун бер... Шулай итеп мунсала йыуындырған һайын ҡырҡ бергә тиклем таҡ һанынса тары һалып сығалар. Был ырым баланың тарылай тәгәрәп, ырыҫлы, ғүмерле булып үҫеүен теләүҙе аңлата (Ошо уҡ маҡсатта икенсе игенде лә ҡулланырға була).

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

*БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ*

**Йәмле йәй айҙары етеүен түҙемһеҙләнеп көтөп алған мәктәп уҡыусылары өсөн мауыҡтырғыс каникулдар мәле килеп етте. Быйыл Башҡортостандың 2680 лагерында 329 мең бала һаулығын нығыта, яңы дуҫтар табып, күңелле ял итә ала. Бынан тыш, белем биреү усаҡтарының үҙҙәрендә лә уҡыусыларҙың ялдарын файҙалы итеп ойоштороу өсөн шарттар тыуҙырыла. Мәҫәлән, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында, йылдағыса, "Ҡурай" лагеры һәм Америка-Башҡорт интерколледжының "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы лагеры асылды.**

# ИНГЛИЗ ТЕЛЕНДӘ АРАЛАШЫУ...

## мәктәптең үҙендә

"Ҡурай" лагеры быйыл тағы ла 120 уҡыусыға йәйге каникулдарын файҙалы, күңелле итеп үткәреү мөмкинлеге бирәсәк. Был лагерға 1-7 синыф уҡыусылары йөрөй. Лагерҙы асыу тантанаһында һары, ҡыҙыл, йәшел, күк төҫтәге галстуктар тағып килгән һәр отряд үҙе менән таныштырып сыҡты. "Ҡояшҡай", "Дуҫлыҡ", "Шаяндар", "Йылмайыу" отрядтары девиздарын ҡысҡырып әйтеп, йыр йырлап ишеттерҙе. Шул арала "Ҡурай" лагерына икенсе тапҡыр килгән Арыҫлан Әлибаев менән әңгәмәләштек. "Бында рәхәт, күңелле, бик күп яңы дуҫтар табырға була. Театрға, киноға, парктарға йөрөйбөҙ. Күмәкләшеп уйнайбыҙ, һикерәбеҙ, йырлайбыҙ, бейейбеҙ - дуҫтар менән шулай үҙебеҙҙең мәктәптә үк рәхәтләнеп ял итәбеҙ", - тип икенсе тапҡыр ошо лагерҙа ял итеүенең сәбәбен аңлатты ул. Әйткәндәй, быйыл лагерға йөрөүселәрҙе Өфө ҡалаһының иң матур парктары, Ботаник баҡса, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры һәм М. Кәрим исемендәге Йәштәр театры, кинотеатрҙар көтә. Балалар башҡорт фильмдары, йәнһүрәттәре менән дә танышасаҡ һәм үҙҙәре лә фильм төшөрөп ҡараясаҡ. Яҙыусылар һәм шағирҙар менән ижад кисәләре, спорт ярыштары, "Һабантуй" байрамы, "Лагерь һылыуҡайы" һәм "Лагерь батыры" конкурстары, "Симфония төнө" һәм башҡа ҡыҙыҡлы саралар ойоштороласаҡ.

- Балаларҙың ялын файҙалы итеп ойоштороуҙан тыш, лагерь ҡалала үҫкән балаларҙы башҡорт мөхитенә ылыҡтырыу, рухи тәрбиә биреү, үҙ-ара башҡортса һөйләшергә күнектереү кеүек маҡсаттарҙы ла күҙ уңында тота. Улар башҡорт халыҡ мәҡәл-әйтемдәрен иҫкә төшөрә, йомаҡ ҡойорға өйрәнә. Һәр көндән алған тәьҫораттарын, уй-фекерҙәрен белдереп, башҡортса инша яҙалар. Оялсан, тыйнаҡ ҡына балалар киләһе уҡыу йылына һәләттәрен үҫтереп, ҡыйыуланып килә, - ти "Ҡурай" лагерының әһәмиәте, файҙаһы тураһында унын етәксеһе Гөлгөнә Зәйнетдинова.

Ә бына Америка-Башҡорт интерколледжының "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы буйынса шөғөлләнгән уҡыусыларҙың йәйге лагеры балаларҙың инглиз телендә һөйләшә белеү кимәлен яҡшыртыу маҡсатында булдырылған. Был программаның төп әһәмиәте шунда: балалар йыл буйына инглиз теле буйынса өҫтәмә дәрестәрҙә алған белемдәрен практикала ҡулланырға өйрәнә. Сөнки улар үҙ-ара һәм вожатыйҙар, уҡытыусылар менән ял осоронда тик инглизсә генә аралаша. Бының өсөн Америка-Башҡорт интерколледжы етәкселеге махсус рәүештә АҠШ-тан уҡытыусылар саҡыра. Мәҫәлән, быйыл Патрик Бейкер, Ирина Подбережна һәм Кэтрин Шрёдер исемле йәш уҡытыусылар йәйге ялдарын башҡорт балалары менән бергә үткәрергә ризалашҡан. Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының инглиз теле уҡытыусыһы Диана Закирова әйтеүенсә, уҡыусылар сит ил вәкиленә русса йә башҡортса һүҙ ҡуша алмай һәм инглизсә аралашырға мәжбүр була. Был инде үҙ сиратында уға оялсанлығын, ҡаушауын еңеп, инглизсә һөйләшә башларға, телмәрен шымартырға мөмкинлек бирә. Артабан юғары уҡыу йорттарына ингәндә, тормошта инглиз телен яҡшы кимәлдә белеүҙең ярҙамы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Ғөмүмән, беҙҙең гимназияны тамамлаған балаларҙың инглиз телен белеү кимәле юғары булыуын күптәр билдәләй. Әйткәндәй, Рәсәйҙә "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы матди яҡтан мөмкинлектәре сикләнгән балаларға инглиз телен өйрәтеүгә йүнәлтелгән. Ике йыл дауамында инглиз теле буйынса өҫтәмә дәрестәрҙә шөғөлләнеү һәм лагерҙа йөрөү бушлай атҡарыла

- Беҙҙең "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһында шөғөлләнгән балалар рәхәтләнеп инглиз теленең нескәлектәренә төшөнә, лагерҙа аралашырға өйрәнә, тренингтар, конкурстар, уйындар һәм төрлө саралар уларҙың һәләттәрен асырға йүнәлтелә. Быйыл тәүге тапҡыр Өфө буйлап гид менән экскурсия ойоштораБыҙ. Ул бөтә мәғлүмәтте лә тик инглизсә генә һөйләйәсәк. Башҡортостан һәм инглиз телендә аралашҡан сит ил халыҡтарының мәҙәниәте, тарихы, йолаларын сағыштырып, төрлө мауыҡтырғас дәрестәр үткәрергә ниәтләйбеҙ. Йылдағыса, педагогтар өсөн дә, уҡыусыларға ла файҙалы ял булмаҡсы, - ти Америка-башҡорт интерколледжы директоры Вячеслав Швайко лагерь эше тураһында.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәйге ялды уйнап-көлөп, күңелле үткәрергә хыялланған балаларҙың теләктәрен тормошҡа ашырыуға күп көс һалған Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы етәкселегенең эшен юғары баһаламай мөмкин түгел. Сөнки бына ун ике йыл дауамында был лагерҙарҙа ял иткән балаларҙың ата-әсәләренән рәхмәт һүҙҙәре ишетеп торабыҙ. Бигерәк тә инглиз телен яҡшы белеүҙең әһәмиәтен аңлаған уҡыусылар "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы буйынса шөғөлләнә алыуҙарына ҡыуана. Ни өсөн тап 20-се ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусылары өлөшөнә төшкән был бәхет? Был һорауға Америка-Башҡорт интерколледжы етәксеһе Вячеслав Швайко мотлаҡ: "Башҡорт телен белгән балалар инглиз телен яҡшыраҡ, еңелерәк үҙләштерә", - тигән яуап бирәсәк.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**






*"Ҡурай" лагеры һәм Америка-Башҡорт интерколледжындағы балалар.*

***✓ Эрнст Мулдашевтың телевидениелағы бер тапшырыуҙа "Урал батыр" эпосын һаҡлап, әлеге көнгәсә килтереп еткергән өсөн башҡорт халҡына рәхмәт еткереүе юҡҡа ғына түгел.***



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# АСЫЛАҺЫ СЕРҘӘР АЛДА ӘЛЕ...



**Бөтә донъяға билдәле офтальмолог, профессор Эрнст Мулдашевтың "От кого мы произошли?" китабын уҡып сыҡҡандан һуң тыуған фекерҙәрем менән уртаҡлашмаҡсымын.**

Ғалим яҙыуынса, кешелек иң әүәл Тибетта барлыҡҡа килгән, шунан уның бер тармағы төньяҡҡа табан таралған (уларҙы автор палеосебер расаһы тип атай), ә инде ошо себер халыҡтарынан Урал-Алтай расаһы бүленеп сыҡҡан. Автор был расаға башҡорттарҙы ла индерә. Шунан һуң ғына ошо расаның көнбайыш тармағынан фин, татар, эстон, венгрҙар һ.б. халыҡтар барлыҡҡа килгән. Ниндәй боронғо бит беҙҙең ҡанбабалар!

Халыҡтар күсә барған һайын, йәшәү шарттарына ҡарап, кешеләрҙең ҡиәфәте лә үҙгәрә барған. Башҡорттарҙың тибет халҡына оҡшашлығы күҙгә бәрелеп тора бит. Шулай уҡ хәҙерге себер халыҡтарының йөҙө генә түгел, телдәре лә башҡорттоҡона иҫ киткес оҡшаш. 1980 йылда юғары уҡыу йортон тамамлағас, тормош иптәшем менән йүнәлтмә буйынса Иркутск өлкәһенә эшкә киттек. Шунда бүрәт халҡы менән тығыҙ аралашып йәшәргә тура килде. Бер бүрәт ҡыҙы менән дауахана бергә ятҡайныҡ. Мин унан: "Һин башҡорт түгелме ул?" - тип һораным. Ҡыҙ көлдө лә, былай тип яуап ҡайтарҙы: "Минән гел шулай тип һорайҙар ул. "Артек" лагерында ял иткәндә башҡорт ҡыҙҙары минең яныма килделәр ҙә: "Һин башҡортмо әллә?" тип һоранылар..." Ҡыҙыҡһынып, бүрәттәрҙең "Әлифба"ларын алып ҡараным. Унда "ҡайсы", "бейәләй" кеүек башҡорт һүҙҙәрен осратып, шаҡ ҡаттым. Үҙем эшләгән нефть һәм газ разведкалау экспедицияһының китапханаһынан "Себер тарихы" тигән ҡалын ғына китап алып уҡыным. Ундағы төҫлө иллюстрациялар араһында башҡорт яугирының һүрәтен күреп, тағы аптыраным.

Э. Мулдашев үҙ китабында Нострадамус, Елена Блаватская кеүек бөтә донъяға билдәле бөйөк әүлиәләрҙең яҙмаларына һылтанмалар яһай. Е.П. Блаватскаяның китабында "Вара" һүҙе осрауын яҙа. Ул был һүҙ менән Кешелек генофондының урынын атай. Мин бәләкәй саҡта күрше ауылда Вара исемле ағай бар ине. Уның былай сәйер исеменә ғәжәпләнә торғайным. Яныраҡ Т. Күсимованың "Башҡорт исемдәре" китабын алып ҡарағайным, баҡтиһәң, Вара - ирҙәр исеме, ул "кеше" тигәндә аңлата!

Генофондтағы кешеләр сомати хәлендә ултыра, тип яҙа Э. Мулдашев. Ә беҙҙә бит Самат исемле кешеләр ҙә күп. "Самат" бер һүҙлектә "ишетеүсе", икенсеһендә ул "мәңгелек", "үлемһеҙ" тигән төшөнсәгә тап килә. Бына бит нисек!

**Автор фекеренсә, мәмерйәләрҙә пирамидалар йә һыу аҫтында менәр, миллионлаған йылдар һаҡланған сомати хәлендәге кешеләр ысынлап та ишетә, улар ысынлап та үлемһеҙ. Был кешеләр, ахырызаман етеп, әҙәмдәр ҡырыла ҡалһа, ер өҫтөнә сығып, кешелек затын яңынан дауам итеү өсөн һаҡлана. Улар шулай уҡ кешеләргә ярҙам итеү өсөн сығыуҙары ла ихтимал.**

Башҡорт халҡы Хызыр Ильясты яҡшы белә. Ул - мөғжизә ҡылыусы аҡ һаҡаллы ҡарт, ҡапыл ҡайҙандыр пәйҙә була ла, ҡапыл юҡ та була. Сомати хәлендәге иң боронғо әҙәми заттар - леуар-атланттар шундай сифатҡа эйә булған да инде. Әсәйем һөйләгән "Бер бите - ай, бер бите - ҡояш ҡыҙ" әкиәтендә үҫал еңгәһенең хөсөтө арҡаһында ике ҡулһыҙ ҡалған йәш ҡатын, балаһын арҡаһына йөкмәп, йылға буйлап китеп барғанда, һыу эсергә тип эйелгән икән, сабыйы һыуға төшкән дә киткән. Шул саҡ Хызыр Ильяс килеп сыҡҡан да: "Ҡыҙым, бисмилла итеп кенә үрел", - тигән. Ҡатын шулай иткән икән, ике ҡулы үҫеп сыҡҡан да, ул тиҙ генә балаһын һыуҙан тартып алған.

Автор яҙыуынса, Моисей (Муса бәйғәмбәр), Иисус Христос (Ғайса бәйғәмбәр), Будда кеүек башҡа бәйғәмбәрҙәр ҙә - генофондтан сыҡҡан кешеләр. Улар бик ҙур бәһлеүәндәр булған. Муса бәйғәмбәр - 5 метр, Будда - 3 метр оҙонлоҡта булған. Былдай дәү әҙәми заттарҙың һөлдәләрен әле лә табалар. Көйөргәҙе районында юл һалған саҡта ғәләмәт ҙур кешенең баш һөйәге килеп сыға. Әйтеүҙәренсә, ул Яҡут ауылы зыяратына күмелгән. Баһадир кәүҙәле кешеләрҙең һөлдәһе табылыуын ошо райондан сыҡҡан күренекле геолог Диҡҡәт Бураҡаев та үҙенең "Мөғжизәләр донъяһы" китабында яҙып ҡалдырған. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендәге алпамышалар ҙа шул атланттар инде. Мин был турала бер нисә йыл элек үк "Киске Өфө" гәзитендә яҙып сыҡҡайным ("Әсәйем лөғәте" рубрикаһы).

Эрнст Мулдашев Нострадамус буйынса бына нимәләр яҙа: "11000 йыл элек атланттар яңы йондоҙ күрә. Ул ҙурайғандан ҙурая барып, түҙеп торғоһоҙ эҫелек һибә башлай. Ул океанға тиклем төшкән Тифон кометаһы була. Комета ер ҡабығын тишеп, магма урғылып сыға. Иҫ киткес күп быу һәм саң атмосфераға күтәрелә, һөҙөмтәлә ер өҫтөн оҙаҡ йылдарға ҡараңғылыҡ баҫа".

Был турала "Урал батыр" эпосының бер версияһында һөйләнелә. Унда күк есеменең нисек итеп Ер шарына яҡынлашыуы, ул килеп төшкәс, нимәләр булыуы ентекләп тәфсирләнә:

*Аяҙ күкте күкрәтеп,*
*Ҡоро йәшен йәшнәтеп,*
*Өйөрөлтмәктәй өйөрөлөп,*
*Баш осонда зыр килеп,*
*Сатай-ботай болғандап,*
*Уңға-һулға тулғандап;*
*Ҡоштай кәйелә биреп,*
*Йә барған кеүек йөҙөп,*
*Йәки йәйелә биреп,*
*Тотош ҡаплап Күк йөҙөн,*
*Ниҙер төшөп килә, ти,*
*Ергә етеп килә, ти...*
*Бөтә донъя һелкенә,*
*Ҡайҙа ниҙер геү килә;*
*Ер ярылғандай булған,*
*Һыу һымаҡ тулҡынланған;*
*Донъяны саң ҡаплаған,*
*Ул саң бик тиҙ ятмаған.*

Башҡорт халҡында "туфан һыуы ҡалҡа" тигән әйтем бар. Ул бөтә донъяны һыу баҫыуын аңлата. Был Тифон кометаһының океанға килеп төшөүенән һуң барлыҡҡа килгән цунами түгелме икән? Шулай уҡ халҡыбыҙҙың Торатауы изге һанала; уны ҡуҙғытырға ярамай, юғиһә, бөтә донъяны һыу баҫасаҡ, тип әйтелә (беҙҙең ерҙәрҙә борон диңгеҙ булған).

**Э. Мулдашев әйтеүенсә, башҡорттар күсмә халыҡ түгел, улар борон-борондан Уралда йәшәгән. Шулай булғас, тауҙарҙың хикмәтен улар яҡшы белә. Шихандарҙы ғына алып ҡарайыҡ. Улар ябай тау өйөмө генә түгел бит. Кем белә, тип-тигеҙ яланда ҡалҡып торған бейеклектәр, бәлки, пирамидаларҙыр?**

Башҡорттар араһында элек-электән әүлиәләр күп булған. Улар ғаләмдең дөйөм мәғлүмәти яланында (Эрнст Мулдашев буйынса, всеобщее информационное поле) инеп, унан мәғлүмәт алған. Был сифат бик һирәктәргә генә бирелә. Әле лә ундай кешеләр бар, тип әйтергә мөмкин.

Башҡорттарҙа "күктең етенсе ҡатында" тигән һүҙбәйләнеш бар, шулай уҡ "ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәндә белә" тиҙәр. Тимәк, йыһан да, ер аҫты ла ҡатлы-ҡатлы. Был турала Э. Мулдашев бик ҡыҙыҡлы итеп яҙа.

Күпме серҙәр һаҡлай үҙендә Уралыбыҙ, халҡыбыҙ! Уларҙы асаһы серҙәр алда әле. Эрнст Мулдашевтың телевидениелағы бер тапшырыуҙа "Урал батыр" эпосын һаҡлап, әлеге көнгәсә килтереп еткергән өсөн башҡорт халҡына рәхмәт еткереүе юҡҡа ғына түгел. Бөтә донъяға билдәле ғалимдың Башҡортостанда экспедициялар ойоштороп, тыуған еребеҙ серҙәрен өйрәнә башлауы оло маҡтауға лайыҡ, башҡорт халҡы тарихын тикшереүгә өлөш индереү өсөн уның үҙенә лә рәхмәттән башҡа һүҙебеҙ юҡ.

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Ошо һырттан Раҡы исемле бигүк бәләкәй булмаған йылғасыҡ ағып сығып, 10 саҡрымлап барғас, Әй йылғаһына ҡушыла. Ошо тауҙан 30 саҡрымдарҙа Йөрәк Таш (автор "гора сердце", тип өҫтәп ҡуя. - **Ред. иҫк.**) тип йөрөтөлгән икенсе бер билдәһеҙ булмаған Урал арты һырты күренә, ул һырт уртаһында түңәрәк ҡалҡыулыҡ булыу сәбәпле ошолай аталған. Ошо һырт итәгендә урамаһы 10 саҡрымлап тәшкил иткән киң күл күренә, унан Әй йылғаһына ҡойоусы шәп ағымлы Һатҡы йылғасығы ағып сыға. Үҙәнгүр тауы өсөнсө билдәле һырт булып, унан ағымының уң яғынан Әйгә ҡушылыусы Болҡалыш һәм Тибис йылғасыҡтары ағып сыға. Ошо йылғасыҡтар араһындағы 2 саҡрымлап ерҙе Үрәнгә тауына табан һуҙылған Ыштаныш күле биләй...

...Сәүелдер йылғасығы буйында ул саҡта Шөкөр исемле билдәле башҡорт байы йәйләй ине, һәм ул күңел асыу өсөн башҡорт мәжлесен уның бар булған күркәмлегендә ҡороу ниәтендә халыҡты йыйынға саҡырып йөрөгән мәлдә һис көтмәгән хәлгә тарып, бөтә әҙерлек мәшәҡәттәрен ҡалдырып торорға мәжбүр була. Уның 10 йәштәр тирәһендәге улы тирмәләр янында уйнап йөрөгән сағында ҡара йыланға баҫҡас, ул малайҙы саҡҡан. Ярты сәғәт тә үтмәне, уның аяғы самаһыҙ шешеп китте, ә йылан саҡҡан урыны шул тиклем ныҡ һыҙланы, ҡысҡырмайынса, уның аяғын борҙороп та булмай ине. Ағарып киткән йөҙө, ҡараңғыланып киткән күҙҙәре һәм йыш-йыш тын алыуы уның ниндәй хәүефле хәлдә ҡалыуын асыҡтан-асыҡ күрһәтеп тора ине. Ошо саҡта мин табип вазифаһына инеп, малайға ярҙам итеү өсөн үҙемдең поход аптекаһын һәм аш-һыу ниғмәттәрен файҙаландым. Ағас майы йылан бальзамын алыштырһа, эстән дауалау өсөн осоусы тоҙ (аммиак тоҙон шулай атағандар. - **Ред. иҫк.**) ҡулланылды; әйтергә кәрәк, төн уҙыуға башҡорт малайы тыныслана бирҙе. Әйтелгән тартышыуҙары ла бер аҙ кәмене. Ошо осраҡтан файҙаланып, башҡорттарҙың йылан менән бәйле ҡайһы бер хөрәфәттәрен иҫкә алып китәм.

Әгәр башҡорт ошондай йыланды үлтерә икән, ҡайҙа һәм нисек кенә ашығып бармаһын, атынан төшөп, йыландың башын таяҡ менән ергә тыҡмайынса китмәй. Үҙҙәренә һәм малдарына килтергән зарары өсөн улар йылан үлтереүҙе мотлаҡ үтәлә торған гәмәл, тип иҫәпләй; йыландың башын ергә тығыу уларҙың билдәле бер ҡараштары менән бәйле. Башҡорттар үлтерелгән йылан янына уның иптәштәре кешеләргә билдәле булмаған үлән тамырын килтереп, яраға һалыу менән йылан терелә икән, тип уйлай. Быны үҙ күҙҙәре менән күреүселәргә һылтанып, улар ошо тамыр бөтә сирҙәрҙе дауалауҙа барса табип сараларынан да һөҙөмтәлерәк булырға тейеш, тип уйлай.

Аттар өсөн ҡурҡыныс, тип иҫәпләнгән сир йоҡҡанда ла ҡара йылан дауалау сараһы итеп ҡулланыла. Был осраҡта йыландың башын киҫеп алалар; ул әле бөтөнләйгә тереклеген юғалтып өлгөргәнсе, йыландың ауыҙын ҡымтып тотоп, аттың яраһына һалалар; шунан һуң атты тиҙ генә һалҡын һыуға индереп, бәйләп ҡуйылған хәлдә уны ошонда бик ныҡ ҡалтырана башлағансы тоталар: улар әйтеүенсә, ошо ысул менән аттар сирҙән бөтөнләйгә арындырып була...

**(Дауамы бар).**

✓ *"Ҡалын" кеҫәле кеше менән аҡсаһыҙҙың кемеһе аҡыллыраҡ? Ҡырҡа ғына әйтеп булмай. Идара йәһәтенән кешенең аҡсаһы күп булыуы ғына әле унын аҡыллы булыуын гарантияламай. Кооператив ошо етешһеҙлекте төҙәтә лә инде.*



# АҠСАҺЫҘЛЫҠ

## "шайморатиктар"

**Бөгөн беҙҙә ҡунаҡта - иҡтисадсы, бөтә Рәсәйҙә үҙенең "шайморатиктар" тип аталған тауар талондары менән билдәлелек яулаған Рөстәм Дәүләтбаев. Рөстәм Хәйбулла улы XX быуат башы немец иҡтисадсыһы Йохан Сильвио Гezzелдең "Ирекле аҡса" теорияһын Рәсәйҙә, хатта донъяла ла беренсе булып тормошҡа ашыра алған белгес. Быға тиклем Геззель теорияһы утопия тип иҫәпләнгән була. Ул теория, уйлап сығарылғандан һуң 100 йыл үткәс, башҡорт егете Рөстәм Дәүләтбаевты илһамландыра. Һөҙөмтәлә, унын Ҡырмыҫҡалы районы Шайморатов ауылында атҡарылған "иҡтисади мөғжизә" тип аталған тәжрибәһе үҙенең ғәмәлгә яраҡлы икәнлеген дәлилләй. Хәҙер "шайморатиктар" феномены менән Рәсәйҙең бик күп төбәктәрендә ҡыҙыҡһыналар. Башҡортостандағы был уникаль күренеште өйрәнергә, Рөстәм Дәүләтбаев менән әңгәмәләшергә, тип, ике йыл элек Санкт-Петербург Аграр университеты ректоры Виктор Алексеевич Ефимов Ҡырмыҫҡалы районына килгәйне. Профессор менән әңгәмәне гәзитебеҙҙең бер һанында яҙып сыҡҡайныҡ инде. Ә шулай ҙа, "шайморатиктар" тигән тауар талондары ни яғы менән үҙенсәлекле һәм ҡыҙыҡлы? Рөстәм ДӘҮЛӘТБАЕВ менән шул хаҡта әңгәмә ҡорабыҙ.**

**РӨСТӘМ ДӘҮЛӘТБАЕВ:**

*Халыҡ менән бер киләсәк өсөн хыялланған лидер ғына иленә файҙа килтерә. Хыялдары халыҡтың хыялы менән тап килмәгән лидер - иленә ҡайғы ғына алып килә.*

### Үҙем тураһында

Мин - иҡтисадсы. Тамырҙарым - Сибай ҡалаһынан. Атайәсәйем хеҙмәт командировкаһына ебәрелгәнгә күрә, бала сағым Монголияла үтте. Монголиянан ҡайтҡас, мәктәпте Сибай ҡалаһында тамамланым. Унан һуң Магнитогорск дәүләт университетында уҡыным, уны тамамлағас, ике йыл ошо ҡалала эшләнем һәм Сибайға ҡайттым. Ҡала хакимиәтендә эшләнем. 2004 йылда Сибайҙан Өфөгә күстем. Өфөнән Ҡырмыҫҡалы районына барып эләктем. Әле Өфөлә йәшәйем.

Мине бөгөн йыш ҡына Рәсәйҙең төрлө ҡалаларына иҡтисадсылар алдында лекция уҡырға саҡыралар. Кешеләрҙе "шайморатиктар" тип аталған иҡтисади тәжрибәм ҡыҙыҡһындыра. Фәндә күптән билдәле булһа ла, ғәмәлдә әллә ни билдәлелек яуламаған ошо эште Ҡырмыҫҡалы районының Шайморатов хужалығы нигеҙендә башлап ебәргәйнек. Тәжрибәлә беҙ кире процент иҫәпле аҡса (деньги с отрицательной процентной ставкой) ҡулландыҡ. Ошо темаға башкөллө сумыр алдынан йәшәйеш нигеҙен тәшкил иткән ҡайһы бер темалар тураһында һөйләшеп алайыҡ.

### Халыҡҡа герой кәрәк

Кем ул герой? Ул - халыҡ менән иңгә-иң терәп алға барыусы, ауыл, ҡала, төбәк, ил мәнфәғәтен ҡайғыртыусы шәхес. Тимәк, власть эйәһе. Власть ниндәй булырға тейеш? Көслө һәм ихтыярлы. Халыҡ менән идара итергә теләһәгеҙ, көсөгеҙҙө һәм ихтыярығыҙҙы эшкә егә алаһығыҙ. Әммә ул юлды кәңәш итә икән, тип уйлай күрмәгеҙ. Нисек кенә булғанда ла, халыҡҡа таянырға кәрәк. Ысын мәғәнәһендәге власть формулаһы биш кенә нигеҙҙән тора. Бына улар:

- Рухи байлыҡ матди байлыҡтан өҫтөнөрәк. Был йөрәгендә Аллаға һөйөү йөрөтөүҙе аңлата. Мөлкәт кешене ҡотҡармай, ә күңелдәге Алла ҡотҡара.

- Дөйөм ихтыяж шәхси ихтыяждан өҫтөнөрәк. Халыҡ ихтыяры бер кеше ихтыярынан мөһимерәк. Ошоно хәтерендә тотҡан лидерға халыҡ та ышана.

- Ғәҙеллек - закондан юғарыраҡ. Әхлаҡ - закондан өҫтөн. Бөгөнгө көн ысынбарлығынан сығып ҡулланғанда, беҙ кәмендә закондарҙың ғәҙел булыуын талап итергә тейешбеҙ. Әхлаҡ нимә? Ололарҙы ололау, ғаилә, дин ҡиммәттәре.

- Хеҙмәт итеү эйә булыуҙан ҡиммәтерәк. Власты шәхси мәнфәғәтең өсөн түгел, ә халыҡҡа хеҙмәт итеү өсөн файҙаланалар. Халыҡ үҙенә хеҙмәт иткән кешегә генә власть бирә. Ялағайланмай, ә ысын мәғәнәһендә халыҡҡа хеҙмәт итеү кәрәк.

Власть милектән мөһимерәк. Бай хакимдар һәр ваҡыт бәләгә тарый. Ошоно аңлау эсер һыу һымаҡ кәрәк. Милекте властан өҫтөнөрәк ҡуйған заман үҙенең һуңғы көндәрен кисерә. Беҙ быньң тере шаһиттары.

Бөгөн милли идея кәрәк, тигән саҡырыуҙар, бәхәстәр йышайҙы. Идея түгел, хыял кәрәктер, тип уйланыла. Власть хыял берлегенән тыуа. Халыҡ менән бер киләсәк өсөн хыялланған лидер ғына иленә файҙа килтерә. Хыялдары халыҡтың хыялы менән тап килмәгән лидер - иленә ҡайғы ғына алып килә. Байығып, сит илгә күсеп китергә хыялланған кеше ысын лидер була алмай.

Либераль идараның төп хатаһы аҡса ярҙамында идара итеүҙә. Был юлдың ҡайҙа алып бара икәнлеген бөгөн үҙ күҙебеҙ менән күрәбеҙ. Аҡса менән идара итеү ришүәтселеккә, теҙгенде ҡулдан ысҡындырыуға килтерә.

Беҙ бөгөн, беҙгә яңы геройҙар кәрәк, тибеҙ. Геройҙар власты үҙ ҡулына алырлыҡ булырға тейеш. Хыялдың дәғүәселәре - закон менән аҡса. Миллион һум эшләп алыу хыялы - бик алдаҡкыс, тоҙаҡлы юл. Үҙем шул тоҙаҡҡа эләккәнем булды. Элэктеңме - бар нәмәңде юғалттың, тигән һүҙ. 1991 йылда Советтар Союзы "һалҡын һуғыш"та тәүҙә мәҙәниәт өлкәһендә еңелде, унан килеп, иҡтисади еңелеүгә дусар булды. Шунан төрлө алдаҡ реформалар, милекте тартып алыуҙар башланып китте. Был күренеште халыҡ һис кенә лә тыныс ҡабул итә алманы, әлбиттә.

### Артель һәм кооператив етештереү

Ҙурҙан ҡупҡанда, беҙҙә көнбайыштың ирекле баҙары бөтөнләй юҡ. Беҙҙә һөнәрселек, кәсепселек (промысловая экономика) иҡтисады өҫтөнлөк итә. Маҡсатты аҡса алыштыра, һәр кеше үҙ һөнәренән килем алырға тырыша. Былардан тыш, икенсе идара ысулы ла бар. Ул - "дөйөм эш шәхси милектән өҫтөнөрәк" тигән ҡағиҙәгә нигеҙләнгән "Етештереүҙең Азия ысулы" тип атала. Был да беҙгә хас. Тарихҡа күҙ һалайыҡ. Сталин ваҡытында инновациялар күп булған. Ниндәй маҡсат алға ҡуйылған? Кешене йыһанға осороу маҡсаты. Йыһанды яулау хыялы кешеләрҙе илһамландырған. Күҙ алдына килтерәйек әле: 1945 йылда Советтар Союзы һуғыштан иң күп юғалтыуҙар кисереп килеп сыға. Һәм, 1945 йылдан алып, 16 йыл эсендә, СССР иҫ киткес тиҙ үҫеш алып, Гагаринды йыһанға осороуға өлгәшә. Был - меңәр йылдар буйы күрелмәгән хәл. Был алға китештең нигеҙ ташы ниҙән ғибәрәт инде? Иосиф Сталин режимында ҡулланыусы продукцияһының 40 проценты шәхси артель тип аталған предприятиеларҙа, беҙҙеңсә, кооперативтарҙа етештерелгән. Быны күптәр белмәй ҙә. СССР-ҙағы тәүге инновацион тауарҙар (телевизор, радиоалғыс, радиола), көнкүреш тауарҙарының күпселеге шәхси артелдәрҙә эшләп сығарылған.

Власҡа Хрущев килгәс, ул илдәге был артелдәрҙе дәүләт ҡарамағына күсереү тураһында указға ҡул ҡуя. Шулай итеп, заманса ҡорамалдар менән эшен йәйелдереп өлгөргән күп кенә артелдәр юҡҡа сыға. Артель йәки кооператив нимә ул? Ул - артып ҡалғанды бергә туплап, үҙеңә етмәгән тауар алыу ҡағиҙәһен күҙ уңында тотҡан бер маҡсатлы кешеләр берләшмәһе. Артелде артель иткән нәмә - унын идара үҙенсәлеге.



Хәҙерге ойоштороу-хоҡуҡи формалар төрлө-төрлө: яуаплылығы сикләнгән асыҡ, ябыҡ йәмғиәттәр, акционерҙар йәмғиәттәре һәм башҡалар. Капиталистик формаларҙа капитал идара итә. Нимә ул капитал? Ул - аҡса. Йәғни, ойошмаға күпме аҡса һалаһың, һинең тауышың да - шул саҡлы. Ә икенсе бер иптәш аҡсаны күберәк һалһа, күпселек тауыш уныҡы буласаҡ. Был ғәҙелме? "Ҡалын" кеҫәле кеше менән аҡсаһыҙҙың кемеһе аҡыллыраҡ? Ҡырҡа ғына әйтеп булмай. Идара йәһәтенән кешенең аҡсаһы күп булыуы ғына әле унын аҡыллы булыуын гарантияламай. Кооператив ошо етешһеҙлекте төҙәтә лә инде.

Кооператив идараһында тәү сиратта - кеше, унан һуң - капитал тора. Тауыш биреү ярҙамында хәл ителгәс, мәсьәләләр ҙә уңышлыраҡ йырып сығыла, уртаҡ фекерҙәр ҙә тиҙерәк табыла. Ни өсөн тигәндә, кооперативта маҡсат та, хыял да, киләсәк тә - бер. Ярай әле һуңғы төр бөгөн яңынан "уяна" башланы.

Донъя иҡтисады өс төргә бүленә. Был турала ла әллә ни һөйләп бармайҙар. Беренсеһе - шәхси сектор. Шәхси секторға транснациональ корпорацияларҙан алып, шәхси эшҡыуарҙ-

***✓ Беҙҙең өсөн кешеләрҙең аҙыҡ-түлек, көнкүреш тауарҙары менән бәйле көндәлек мохтажлығынан арыныуы мөһим ине. Бер мәл, халыҡ геү килеп, "шайморатиктар" ярҙамында алыш-биреш итә башламаһынмы!***



арға тиклем - барыһы ла инә. Икенсеһе - дәүләт секторы. Унда хәрби заказдар, хәрби сәнәғәт - дәүләттең үҙенә генә ҡараған өлкә инә. Өсөнсөһө - кооператив сектор. Кооператив сектор ул - кешеләр төркөмдәренә ҡараған иҡтисади берлектәр.

Был секторҙар динамикала нисек үҫә? Шәхси секторҙың иҡтисад күләме йылына 1 процентҡа күбәйә, дәүләт милке - 1 проценттан да аҙыраҡ капитал йыя. Кооперативтар секторының иҡтисади күләме йылына 15 процентҡа арта. Шәпме? Шәп! Капитализм ҡояшы байыуға табан бара, унын артынса ижтимағи аң күтәрелә. Йәнә, Аллаға шөкөр - беҙҙең ҡотло илебеҙҙә ҡулланыусылар йәмғиәте тигән бик шәп хоҡуҡи форма йәшәп килә. Халыҡ-ара закондар был өлкәне бик ентекле күҙәтеү аҫтында ҫал. Испанияның төньяғындағы Басктар илендә "Мондрагон кооперативы" корпорацияһы 2008 йылғы көрсөктө бик еңел үткәрә. Шул уҡ ваҡытта Испанияның башҡа төбәктәре көрсөктән бөгөлөп төшә. "Мондрагон кооперативы" дөрөҫ юл һайлаған: уларҙың иҡтисады һатыу итеүгә генә нигеҙләнмәгән. Көрсөк етһә, һатыу иҡтисады емерелә лә төшә.

Тағы, бөгөн бик әүҙем ҡулланылышта йөрөгән термин менән аталған иҡтисад - импортты алмаштырыу ҙа бар. Ҡайһы бер сәйәсмәндәр уны поляк алмаһын Ирандан килтерелгәне менән алыштырыу тип кенә аңлай. Ысынында, уның мәғәнәһе башҡаса. Импортты алыштырыу - урындағы етештереүҙе әүҙемләштереү менән бәйле. Йәғни, бында ил эсендә етештерелгән тауарҙы халыҡ үҙе файҙалана, тигән һүҙ. Сит идара итеү өсөн булдырылған абстракт нәмә. Элегерәк миңә бер кеше: "Рөстәм, һин матур һөйләйһең дә ул, ғәмәлдә, ошолай уҡ матур итеп эш эшләй алыр инеңме икән? Һөйләгәндә, бөтәбеҙ ҙә шәп, ә һин берәй нәмә килтереп сығарып ҡара", - тип әйтеп һалды. Был һүҙҙәр мине сығырымдан сығарҙы, әлбиттә. Һөҙөмтәлә, мин эшләгән берләшмәлә, илдә иҡтисади көрсөк барыуына ҡарамаҫтан, ике йыл эсендә: тауар әйләнеше - ун ике тапҡырға, етештереүсәнлек - 20 процентҡа, эш хаҡы - 28 процентҡа артты. Беҙ Артур Нурғәлиев менән халыҡта "шайморатиктар" тип исемләнгән идара итеү системаһын булдырҙыҡ.

"Шайморатиктар" аптырағандың көнөнән күрелгән сара булараҡ башланды. Оҙаҡ йылдар Себер тарафтарында "оҙон"

Әлеге эшҡыуар менән эшләй башлағас, көндәлек сығымдарға аҡса булһын, тип, 2006 йылда беҙ Шайморатов ауылында һәм район үҙәге Ҡырмыҫҡалыла ике магазин төҙөп ултырттыҡ. Күпселек халыҡтың аҡсаһы булмаһа ла, бюджет урындарында эшләүселәрҙеке бар ине әле. Улар берәй нәмә һатып алырға кәрәкһә, Өфөгә юллана, үҙенә кәрәклеһен баш ҡала магазиндарынан алып ҡайта. Тимәк, аҡса Өфөгә китә. Беҙгә бына ошо кешеләрҙе үҙ магазиндарыбыҙға йөрөтә башларға кәрәк ине. "Әйҙә, уларға кәрәкле тауарҙарҙы үҙебеҙ һатып алып, һата башлайыҡ, "бюджет"тағылар Өфөгә бармаҫ, беҙҙән һатып алыр, беҙ ул һумдарҙы үҙ эшебеҙҙе үҫтереүҙә файҙаланырбыҙ", - тигән тәҡдимем эшҡыуар тарафынан хуплау тапты. Күпмелер ваҡыттан һуң: "Магазиндар табыш процентҡа кәмей торған тауар талондары ине улар. Йәғни, кеҫәндә 100 шартлы берәмек ята икән, тотонмаһаң, бер айҙан һуң ул 98 һум ҡала. Барыһы ла ирекле. Теләмәһәң, алма. Ҡасан һум килерен көт. Һум килһә, хеҙмәт хаҡын һумлата алырһың. Теләһәң - бөгөн үк ал. Беҙҙең өсөн кешеләрҙең аҙыҡ-түлек, көнкүреш тауарҙары менән бәйле көндәлек мохтажлығынан арыныуы мөһим ине. Бер мәл, ышанаһығыҙмы, юҡмы, халыҡ геү килеп, "шайморатиктар" ярҙамында алыш-биреш итә башламаһынмы! Аҡса юҡлыҡтан баш осонда "эленеп" торған бурыс төйөндәре сиселде. Беҙҙең аҡса күҙ асып йомғансы "ҡул араһына инде": инәйҙәр юл буйҙарында ошо аҡсаға көнбағыш, һөт-май һатты, таксистар кеше ташыны. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең талон бөтөн Ҡырмыҫҡалы районы буйлап таралды.

# КӨРСӨГӨН...

## ярҙамында хәл иттек

тота. Был хатта БМО-ла ла яҙылған. Был - беҙҙең юл, тип әйтә биреп ҡуйғайным инде. Ни өсөн? Сөнки Рәсәй, атап әйткәндә, Башҡортостан ошо форманың бишеге ул. Кооперативтар беҙҙең ырыу бүленеше өҫтөнлөк алғанда уҡ барлыҡҡа килгән. 1831 йылда барлыҡҡа килгән беренсе артель "Ҙур артель" тип атала, уға декабристар нигеҙ һала. Уның уставы музейҙа әле лә һаҡлана. Был артель әле беҙ һанап үткән нигеҙҙәргә таяна. Бөгөн был хәрәкәтте Европа ла, Һиндостан да, Ҡытай ҙа күтәреп алды. Рәсәйҙә был әле яңы башланып ҡына тора. Беҙҙең быуын эште башлай ғына ала. Ә инде уны дауам итеү - үҫеп килеүсе йәштәребеҙ иңенә төшөр бурыс.

### Кооперативтар өлгөһө

Донъяның иң бай кешеләре, халыҡ-ара тел менән әйткәндә, донъя элитаһы төйәкләнгән Швейцария һәр саҡ алтын урталыҡты һаҡлай.  Унда 62 мең ағзаһы булған "Иҡтисади түңәрәк кооперативы" тип исемләнгән ойошма бар. Уның йыллыҡ тауар әйләнеше 1 миллиард 650 миллион доллар. Быны һумға әйләндерһәң, 70-кә ҡабатлаһаң, 115 миллиард һум килеп сыға. Швейцариялағы кооперативта ағза иҫәпләнгән 62 мең кеше өсөн 115 миллиард һумлыҡ тауар әйләнеше күпме килем килтерә икәнлеген күҙ алдына килтереүе ауыр түгел. Сағыштырыу өсөн: Күмертау ҡалаһында 61 мең кеше йәшәй. Әлеге 115 миллиардлыҡ тауар әйләнеше Күмертау предприятиеларында булһа, бай-бай ғәрәп илдәре ары торор ине. Йәнә бер мил менән идара итеү өсөн уның ауыл хужалығын эшкә яраҡһыҙ итеү ҙә етә. Беҙ аҙыҡ-түлекте үҙебеҙ етештерергә өйрәнһәк, бер кемгә лә бойһонмай башлар инек. Шуның өсөн дә 1991 йылда тәүге туҡмаҡ ауыл хужалығы башына төштө. Ер - иҡтисадтың нигеҙ ташы. Иҡтисадҡа иң күп файҙа ауыл хужалығы тармағынан килә. Бер крәҫтиәндең хеҙмәте бүтән тармаҡтарҙан 15 кешене эш менән тәьмин итә. Ауыл хужалығына һалынған бер һум башҡа тармаҡтарға 2,64 һум файҙа килтерә. Бына был - импортты алыштырыу моделе. Уны йәмғиәттәр иҡтисады, тип тә атайҙар. Кешелек ҡапыл йәмғиәттәргә берләшеү юлына йөҙ борҙо.

Ябай ғына кооператив схема миҫалын әйтәйем әле. Кооперативтағы кешеләр менән бергәләп, 30-ар мең һум торған 10 "айфон"ды 28-әр меңгә алырға теләйһегеҙ икән, ти. Һатыусыға барып, был теләгегеҙҙе әйтһәгеҙ, ул риза булмаясаҡ. "Мин бит һалым түләйем", - тип әйтәсәк. Ә һеҙ уға: "Ә һин телефондарыңды ал да, беҙҙең кооперативҡа ин. Беҙ һинән тауарыңды һатып алырбыҙ, һин һалым түләмәй генә килем алырһың. Кооперативтар күпселек һалымдарҙан азат ителгән", - тиһәгеҙ, һатыусы ҡуш ҡуллап риза буласаҡ. Бына һиңә 28 меңгә 30 меңлек телефон!

### Сараһыҙҙың көнөнән…

Аҡса, һүҙлектәрҙә күрһәтелгән мәғәнәһенән тыш, тағы бер мөһим һыҙатҡа эйә. Ул тауарҙы, эште хаҡы буйынса билдәләү ысулы ғына түгел, идара системаһы ла. Быны ла әллә ни һөйләп бармайҙар. Аҡса ул - аҡса эшләгән Артур Нурғәлиев көндәрҙән бер көндө күңел ҡушыуы буйынса үҙенең тупланған байлығын Башҡортостандағы ауыл хужалығы тармағына һалырға ҡарар итә. Ул 150 миллион һумға фермаларҙы тулыһынса йүнәткән, мал-тыуар һатып алған һәм ер эшкәртеү эшенә тотонған. Аяҡҡа баҫтым ғына тигәндә, донъяны көрсөк быуа, түләй алмау касафаты беҙҙең геройыбыҙға ла килтереп тондора. Эшҡыуар хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләй алмай башлай, тегеләр прокуратураға мөрәжәғәт итә. Суд, билдәле, хеҙмәткәрҙәрҙе яҡлап сыға һәм суд приставтары эшҡыуарҙың иң тиҙ, иң еңел һатыла торған тауарын - мал-тыуарын тартып алып, һуйып, итен һатырға булып китә. Кем өсөндөр мал - ит сығанағы булһа, крәҫтиән өсөн ул - һөт бирә торған ҡорамал, станок бит инде. Булған ғына производство шулай "үлтерелә" яҙа. Шул көндәрҙә ул миңә, быға тиклем инвестиция механизмы буйынса кәңәш һораған танышына, мөрәжәғәт итте лә инде. Ул ваҡытта минең дә үҙ эшем "янып" өлгөргәйне.

Беҙ ауыл хужалығында касса айырмаһының шаҡтай икәнлеген 2006 йылда уҡ аңлағайныҡ. Яҙғыһын сәсеүгә төшһәң, көҙгә тиклем һин хеҙмәткәрҙәреңә эш хаҡына, яғыулыҡ-майлау материалдарына, запас частарға аҡса түгәһең дә түгәһең. Ахыр сиктә, көҙ еткәс, уңышты йыйып алғас, уны һата башлап ҡына бер аҙыраҡ килемгә эйә булаһың. Ул килемде лә бурыстарыңды ҡайтарыуға тотонаһың әле. Банкҡа процентты түләргә кәрәк. Шундай күңелһеҙ хәл бына. Ә көрсөк башланғас, банктар кредитты бөтөнләй бирмәҫ була. Һөҙөмтәлә, яҙғы сығымдарға ла аҡса ҡалмай, тау шикелле бурыс йыйыла.

килтерәме?" - тип ҡыҙыҡһындым. Эшҡыуар: "Әйтеүе генә еңел, мин бит үҙ эшселәремә аҡса түләй алмайым, шуға, улар ҙа минең магазиндан кәрәк-яраҡ ала алмай", - тип яуапланы. Шулай итеп, беҙ аҡса ролен үтәүсе тауар чектарын үҙебеҙ эшләп сығарып, тауарҙы һумға ла, әлеге тауар чектарына ла һатып алып була торған система булдырҙыҡ. Идеяны бергәләп барлыҡҡа килтерҙек, ә проектты мин эшләнем. Ошо урында аҡса системалары хаҡында әйтеп үтеү кәрәк.

### Өс төрлө аҡса

Донъяла ниндәй генә исемле аҡса юҡ. Ысынында, аҡса ни бары өс төрлө. Тәүгеһе - беҙҙең зитыбыҙға тейгән, беҙҙе ыҙалатҡан, әхлаҡ нигеҙҙәренә бөтөнләй тура килмәгән - ыңғай процент иҫәпле аҡса. Ул аҡсаның дәүмәле ваҡыт үтеү менән үҫә бара. Ниməһе әһәмиәтле, дин процентҡа аҡса биреүҙе лә, кредит алыуҙы ла тыя. Ә беҙ, сараһыҙҙан, ошо системаны файҙаланып йәшәй бирәбеҙ. Башҡа барыр юлыбыҙ юҡ. Процентһыҙ, 0 процент иҫәпләһе - аҡсаның икенсе системаһы. Ул система борондан ҡалған, архаик система. Алтын һымаҡ, йылдар үтеү менән ҡиммәтен дә юғалтмай, әммә үҫеш моделе лә юҡ уның. Өсөнсө система - кире процент иҫәпле аҡса. Ул Боронғо Египетта уҡ файҙаланылған. Кешеләргә, расписка яҙҙырып, иген биргәндәр. Ә иген ваҡыт үтеү менән үҙҡиммәтен юғалта. Шулай итеп, был аҡсаның ҡиммәте лә түбәнәйә. Ваҡыт үтеү менән "ҡартая", хаҡы төшә торған аҡса - "кире процентлы" тип атала. Уны йыйып булмай. Тиҙ арала нимәлер һатып алыу отошло. Беҙ үҙебеҙҙең кире процент иҫәпле аҡса системаһын булдырҙыҡ, тигәйнем инде. Ул аҡсаны йыйып барыуҙы файҙаһыҙ иттек. 28 көндә ике

### "Шайморатиктар"ҙың яҙмышы

Ҡырмыҫҡалы районы Шайморатов ауылындағы алдынғы хужалыҡ бөгөн дә уңышлы ғына эшләп килә. Беҙ барыһын да асыҡтан-асыҡ һөйләргә ғәҙәтләнгәнбеҙ. Был ихласлығыбыҙ үҙ ваҡытында, беҙҙең менән хоҡуҡ органдары ҡыҙыҡһына башлағас, ярҙам да итте. Суд беҙгә "шайморатиктар"ҙы баҫтырып сығарырға рөхсәт итте. Әле беҙ уның электрон вариантты өҫтөндә эшләйбеҙ. Тик бер генә уңайһыҙлыҡ бар - күп кеше әле электрон карталар менән эш итә белмәй.  Әйткәндәй, халыҡ тарафынан ҡушылған "шайморатик" һүҙе лә символик мәғәнәгә эйә. Барыбыҙ ҙа беләбеҙ - ул Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы, Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Миңлеғәле Шайморатов исеме менән аталған. Шайморатов - дәүләт тарафынан танылмаған, әммә халыҡ тарафынан танылған, ихтирам ителгән, йырҙарға ҡушып йырланған батыр. Икенсенән, һүҙҙең семантикаһына килгәндә, ул шаһи һәм морат һүҙҙәрен ҡушыу ярҙамында яһалған. Шаһи - төп, морат - хыял. "Төп хыял" тигән һүҙ.

"Шайморатиктар"ҙы уңышлы файҙаланып, шуны аңланым: тормошҡа ашмаҫ хыялдар юҡ. Теләһәң, бөтөн донъяны яуларға була. Хыялың ғына булһын. Мин бер егетте беләм - уны һеҙ ҙә беләһегеҙ - бала сағынан үҙенә иң ҙур маҡсат ҡуйған: донъяны яуларға теләгән һәм хыялын тормошҡа ашырыу өҫтөндә арымай-талмай эшләп, 2014 йылда тиҙ йөрөшлө шашка буйынса донъя чемпионы булған. Айнур Шәйбәков тураһында әйтәм...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иҡтисад белгесе Рөстәм Дәүләтбаевтан беҙ шундай һабаҡ алдыҡ: аҡса юҡ, тип, бойоғорға кәрәкмәй. Беребеҙҙә - һәләт, икенсебеҙҙә - идара итеү мөмкинлектәре, өсөнсөбөҙҙә - аҡса бар. "Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй" тигәндәй, берләшеп, бер хыялға табан атлайыҡ! Уңышлы булыуҙың ябай ғына моделе был.**


**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

***Документтарығыҙ тәртиптә, беҙҙең һеҙгә ҡарата бер ниндәй ҙә дәғүәбеҙ юҡ. Тик һеҙҙе ашығыс рәүештә начальство таптыра. Ҡайҙа булыуығыҙға ҡарамаҫтан, тиҙ арала шунда оҙатырға ҡуштылар.***






Мәҙинә ЙӘҒӘФӘРОВА

# ҺЫНАУ

(ХИКӘЙӘ)

–Ур-ра-а-а!.. Атайым ҡайтты!..

Баянан бирле тәҙрә төбөндә нимә менәндер булышҡан кескәй Азат, туп итеп иҙәнгә һикереп төштө лә, осоп-ҡунып ишеккә ҡарай йүгерҙе.

- Ай Аллам, ашым өлгөрмәй ҡалды ла һуң...Ҡалай бөгөн иртәләне әле, ҡояш теге яҡтан сыҡмаһа ярар ине... Нәсимәү, күрше, икенсе юлы иркенләп һөйләшербеҙ, йәме. Былай ҙа бөгөн һүҙ бутҡаһын бешерҙек кенә, әй...

- Ильясың ҡалаға китте, тигәйнең түгелме?

- Әлләсе, шулай тигәйне иртәнсәк кенә. Ҡапыл ғына пландары үҙгәреп китмәһә тағы.

- Аһ-аһ, юҡ таһа, был, ней, Ильяс түгел, милицияныҡылар!.. Ана, артынса беҙҙең участковый ҙа төштө... Бында табан боролдолар ул, әйкәйем!.. Былар ништәп йөрөй икән?..

Күршеһе тәҙрәне тишә яҙып, урамды күҙәтә, имеш. Бешкән итен һоҫоп алайым да, йәһәтләп һурпаһын һөҙөп, картуфын төшөрөп ебәрәйем, тип ҡабаланған Гөлсөмдөң ҡулындағы сүмесе шаҡылдап иҙәнгә барып төштө, йөҙө ап-аҡ булды, сырайы ҡасты.

- Йә,Хоҙай, әллә Ильяс менән бер-бер хәл булдымы икән?..

Тыны ҡыҫылыуҙан үҙ тауышын үҙе танымаңы хатта. Ә ут күршеһенең ҡыҙыҡһыныуы хатта йөҙөнә сыҡты, күҙҙәре йылтырап, ауыҙын аса биреп, ниндәйҙер ҙур яңылыҡ көтөп, ишеккә текәлде.

- Туҡ-туҡ-туҡ!..

Йөрәге шулай күкрәген ярырҙай булып тибәме икән? Гөлсөмдөң быуындары йомшарып, ҡамырға әйләндеме ни, ҡапыл хәле бөтөп, аш бүлмәһенән сыға алмай бер булды.. Юҡ, ахыры, ишек шаҡыйҙар ҙа һуң! Ҡайһылай оҙаҡ мыштырлайҙар соланда... Күп булһа, ике-өс минут үткәндер, ә уға ошо ғына арауыҡ та бик оҙаҡ һымаҡ тойолдо.

- Мөмкинме?

Ниһайәт, ишекте шар асып, бәһлеүәндәй йәш егет килеп инде.

- Үтегеҙ, әйҙә-әйҙә, был яҡҡа!

Ҡатын һағайып ҡына егеткә ҡараш ташланы, шунан үҙ-үҙен ҡулға алып, инеүсене түргә әйҙәкләне, тик тегеһе ваҡыты юҡлығын әйтеп, ишек төбөндә баҫып тороуон белде. "Быныһы таныш кеше былай..." тип сырайы асыла төштө ҡатындың. Бик яҡындан белмәһә лә, ара-тирә күргеләп ҡалғаны бар шунда. Ошо урман төбәгендәге биш-алты ауылды берләштергән милиция бүлеген етәкләй был йәш егет.

- Хужа кәрәк ине бит әле, үҙе ҡайҙа?

Милиционер һораулы ҡарашын Гөлсөмгә төбәне.

- Ул, ней, был ваҡытта ҡайҙан өйҙә булһын? Таң һарыһы менән ҡалаға сығып киткәйне. Ҡустым, исмаһам, бынау ултырғысҡа булһа ла терәлегеҙ. Тәүгә инеп, улайтып тупһала тормайҙар инде, йолаһы шулай...

Йәш егет уңайһыҙланып китте, шулай ҙа хужабикә һуҙған ултырғысты ситкәрәк этте лә өҙөлгән һүҙен дауам итте.

- Эш бит, апай, эш... Ҡасаныраҡ ҡайтыр икән?

- Әллә инде, унынан алдан әйтеп булмай.

- Нисауа-а-а-а!.. Момент табырбыҙ, беҙҙең ашаған икмәк шул бит...

Быны ишетеп, Гөлсөм бөтөнләй ҡаушаны, кинәт күҙ алдары ҡараңғыланып, башы зырылдап әйләнеп, йөҙөп киткән кеүек булды, нишләгәнен дә абайламай, һыңар ҡулы менән өҫтәл өҫтөнә киптерергә тип һалған һалмаһына таянды. Ул ҡасан иҫһушын йыйғансы, милиционер егет һаубуллашып та тормай, сығып китте. Уның артынса уҡ, бая ғына иркенләп, йәйелеп ултырырға йыйынған күршеһе лә ҡуҙғалды.

- Туҡта, туҡта, Гөлсөм, сабыр ит... Буштан-бушҡа көйәләнмә... Ирендең ҡурҡҡандай бер нәмәһе лә юҡ, әгәр булһа, моғайын, кисә кис үк кәңәш-төгән итер ине...

Ҡатындың башында ире менән булған әллә нисә төрлө хәүеф-хәтәрле хәлдәр өйөрөлдө, шуға үҙ-үҙен шулайтып тынысландырырға тырышты. Ысынлап та, ниңәһенә ул хәтлем бөтөрөнә әле, ире ҡайтһын әле тәүҙә, аңлатыр. Хәҙер, күпме ғүмер бергә йәшәп, бер-береһен ярты һүҙҙән, бер һирпелеп ҡарауҙан аңлап торалар. Ҡаза-фәлән булһа, был егет асығын әйтер ине, тимәк, иң мөһиме - ире иҫән-һау. Гөлсөм өйөрмә кеүек тынысһыҙ уйҙарынан арынып, һалҡын аҡыл менән хәлде самалап ҡарғандан һуң, еңел тын алып, көндәлек эштәренә тотоноп китте. Ишек алдына ҡуйылған тимер өсаяҡ аҫтына ҡоро-һары тапсыҡтар менән ут тоҡандырып ебәрҙе, ҡаҙанына аштырғансы һыу ҡойоп, йылытырға ултыртты. Эшкә әүрәп, тамам тынысланып, йыуырға тип сығарған керҙәрен ағына-ҡараһына айырып һала башланы.

- Атаҡ-атаҡ, килен! Ҡарасы-күрсе бынауҙы, ирен милицияға биктәтеп, үҙе эрәхәттәнеп донъя көтөп ята, үәт!..

Урам ҡапҡаһы шар асылып китте лә унан ҡойон кеүек өйөрөлөп килеп ингән ҡәйнәһе, Гөлсөмгә ауыҙ асырға ла ирек бирмәй, шарылдап әрләй башланы.

- Ҡотолдоңмо, нәкәнис?.. Нимә, бер эскән, тип өйөңә милиция саҡыртып ятаңмы?..

Ҡәйнәһенең был һүҙҙәренә аптырап, күҙҙәре ҙурайып китте Гөлсөмдөң, тик шарҙыуан холҡон яҡшы белгәс, ҡайтарып бер ни ҙә өндәшмәне. Хәйер, ҡайтарып әйтеү менән утҡа һипкән кәрәсин кеүек дөрләйәсәк кенә, өндәшмәүең - алтын... "Эй, аллам..." тип, ҙур кәритә тасҡа һыу ҡойҙо ла күпертеп кер йыуа башланы.

- Ыста, ыста, әстәғәфирулла!.. Кешенән оят бит, әҙәмдән оят!..

Ҡара әле, ҡулына нарушник кейҙереп тороп алып киткәндәр, тей бит әле... Ирештегеҙме? Һуғыштығыҙмы? Ништәнегеҙ, тием һиңә?

- Кем әйтә һуң уны, ҡәйнәм?

- Бына, әле генә Нәсимә күршең лавкала бисәләргә һөйҙәп торған... Ҡаҙҙарымды Ҡыҙылға төшөрәйем, тип кенә урамға сыҡҡайным, апһыным аптырап йүгереп килгән. Лавкала әле генә ишетеп сыҡтым, тей...

Ҡәйнәһенең тауышын ҡапҡа тышынан илап килеп ингән улыныҡы баҫып китте.

- Әсәй! Әсәй! Уралға әйт әле, үсекләшә! Минең атайымды бандит, тей...

- Аһ-аһ!.. Бынағайыш! Балаһына тиклем шулайтып торамы? Шул күршеңде әйтер инем, нимәгә буйы белән эйәләтәң? Ана, лавкала ләстит һатыуы етмәгән, ищу етмәһә бот буйындай балаһына тиклем әпсәһе ыңғайына ауылдың ғәйбәтен йыйып йөрөймө? Күрһәтермен мин уға бандитты!

Ҡәйнәһе ел-дауыл кеүек, нисек килеп ингән, шулай сығып та китте. Гөлсөм ауыр көрһөнөп, һабынлы ҡулдарын таҙа һыу менән сайҙы, кер-мергә тип ташлаған сепрәк-сапраҡҡа ашығып һөрттө, шунан малайының янына килеп сүкәйҙе.

- Эй, бәпкәмде... Йә, нимә бүлештегеҙ инде был юлы?

- Һы-ы, мин түгел дә, Урал үҙе үсекләшә. Һинең атаңды милиция алып киткәс, ул бандит була, тей... Шулай булғас, һин бандит малайы, тей...

- Бандит, тип, кеше талап, кеше үлтереп йөрөгәндәрҙе генә әйтәләр, ә беҙҙең атайыбыҙ бик һәйбәт. Кем Урал менән икегеҙгә ҡайһындай матур итеп өр-яңы арҡандан әүһәләк тағып бирҙе? Кем һаҙға барып, муйылдан уҡһаҙаҡ юнып киптерҙе? Ә кем кисә генә урмандан икегеҙгә лә ҡуян күстәнәсе алып ҡайтты?

- Атай шул! Атайым! Әпәт атайым!

Кескәй Азат ҡыуанысынан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. Әле генә керпектәренән ана тамам, бына тамам, тип мөлдөрәшеп торған күҙ йәштәре ни арала кибеп өлгөрҙө, күҙҙәре осҡонланып китте. Май ҡояшы сыҡтымы ни!

- Әсәй!

- Әү, бәпкәм!

- Мин икмәккә май һылап ҡына алам да уйнарға сығам, йәме?

- Сәй эсмәйбеҙме ни?

- Асыҡманым... Һыу ғына эсәм дә.. Әсәй, теге ялтыр тышлы кәнфитте Уралға ла бирһәм буламы?

- Бир, тик икешәрҙән генә алығыҙ, йәме, күп ашаһаң...

- Беләм, мин беләм! Теш һыҙлай! Һин гел шулайтып әйтәң...

Азат, ҡабаланыуҙан аяғындағы сандалийҙарҙы икеһен ике яҡҡа ҡәйелтте лә, йүгереп өйгә инеп китте. Гөлсөм уларҙы йәтешләп ултыртты ла эсе бошоп күтәрмәгә ултырҙы. Ире ҡасан ҡайтыр икән? Ай Аллам, күршеһенең берҙе биш итә торған ғәҙәте бар былай. Бер бөгөн түгел былайтып хәбәр йөрөтөүе. Ни хәл итәһең инде, терәлеп ятҡан күршең менән ҡатышмай ҙа булмай. Кәкерене ҡәбер генә төҙәтер, ти боронғолар, ана бит, шул юҡ ҡына нәмәне ни тиклем арттырып ауыл тултырған, үәт. Дуҫ бар, дошман бар, тигәндәй, яратҡанынан яратмағаны етерлек. Гөлсөм толҡа тапмай, ишек алдында ураланды, баҡсаһына инеп, ҡый үләндәрен уаштырҙы, аптырап кире сыҡты. Ҡояшы ла байымаҫ булды, төпһөҙ зәңгәрлеккә арҡанлап ҡуйғандармы ни?

* * *

Ильяс ҡалалағы йомоштарын бик тиҙ бөтөрҙө. Сәфәренең уңышлы булыуына ҡыуанып, "Юлдаш" радиоканалынан ағылған күңелле көй ыңғайына мөңгөрләй-мөңгөрләй, көҙгө кеүек ялтыр юлдан машинаһын ҡыуҙы. "Дә-ә-ә, быйыл был яландарға ла иген сәселмәгәс, белмәйем, нимә булыр... Районды туйҙыра торған совхоздың да эше мөшкөлләнгәс, башҡалар хаҡында ни әйтәһең..." тип, юлдың ике яғынан күҙ күреме ерҙәрҙә билсән, әрем, алабута, әрһеҙ аҡтамыр баҫҡан буш баҫыуҙарға күҙ ташланы. Заманында гөрләп торҙо был баҫыуҙар, хәҙер тейешенсә ҡулланмағас, ана, йәш ҡайын үҫентеләре баҫып бара. Аптырағас, сабынлыҡ итеп тотонған булалар ҙа, унда ла иң шәп үҫкән ерҙәрен уйып-уйып ҡына сабып алалар. Күңелде йыуатҡаны, бер нисә аяҡҡа баҫып нығынып киткән фермер бар икән был тирәлә. Бынау ерен ҡалай матур итеп һөрөп, сәсеп ҡуйғандар, күҙ теймәһен, апаруҡ булып тартылып үҫеп килә игендәре. Ямғыры ваҡытында яуып торһа, көҙгә шәп уңыш бирмәксе бынау баҫыу.

Ауылға етәрәк, ҡаршы килгән машиналар фараларын бер яндырып, бер һүндереп сигнал бирә башланы. "Әһә, алда гаишниктар бар икән", тип ҡайышын тарттырып ҡуйҙы, ул-был нәмәһенә күҙ йүгертеп алды. Бөтәһе лә тәртиптә былай, бәйләнерлек бер ни ҙә юҡ. Юлда ул былай ҙа ипле йөрөй, ҡайһы бер дыуамал шоферҙар кеүек ҡыумай. Хатта Гөлсөмө ҡайһы саҡта үпкәләп тә ала шуның өсөн: "Ҡара әле, бынауы беҙҙекенән дә хөрт кенә машина ҡыуып үтте лә китте, әйҙә, ҡыуыңҡыра, нимә бабайҙар кеүек йәйлап алдың да киттең", - тип сәменә тейһә лә йылмая ла ҡуя. "Ҡайҙа ҡабаланырға, былай ҙа барып етербеҙ. Юлдар һәйбәт хәҙер, Аллаға шөкөр. Һиңә элекке күтәртелгән юлдарҙы күрергә ине, үәт, ул саҡта быларын төҙөп биргәндәренә аҙым һайын рәхмәт уҡып ҡына йөрөр инең. Шулай, кеше рәхәтлеккә, еңеллеккә тиҙ өйрәнә шул..."

Тегеләр ауыл осонда тора ине. "Ҡара һин уны, ҡалай уңайлы урын һайлағандар. Беләләр ҡайҙа торорға, был ҡалҡыулыҡтан бар тирә-яҡ ус төбөндәгеләй күренә шул. Туҡтаттылар, береһе ыңғай номерҙарҙы ҡарап ебәрҙе, икенсеһе килеп честь бирҙе лә документтарын һораны. Ильяс ҡабаланмай-сәбәләнмәй генә машинанан төштө.

- Бына, бөтәһе лә ошонда.

- Тәк, Сынбулатов Ильяс Баязитович... Барыһы ла тап килә...

- Эйе, мин булам.

- Машинағыҙҙы бороғоҙ ҙа ыңғай район үҙәгенә милиция бүлегенә китәһегеҙ.

- Ни өсөн? Бер ниндәй ҙә тәртип боҙоу булманы ла һуң...

- Документтарығыҙ тәртиптә, беҙҙең һеҙгә ҡарата бер ниндәй ҙә дәғүәбеҙ юҡ. Тик һеҙҙе ашығыс рәүештә начальство таптыра. Ҡайҙа булыуығыҙға ҡарамаҫтан, тиҙ арала шунда оҙатырға ҡуштылар.

Ильястың һораулы ҡарашын күреп, икенсеһе лә һүҙгә ҡушылды.

- Ярай, беҙгә әйтелгән икән, үтәргә тейешбеҙ. Приказ начальства не обсуждается. Ә һеҙ тегендә барғас, үҙегеҙ асыҡларһығыҙ. Машинағыҙға ултырығыҙ...

Бына һиңә - мә! Ни булды икән? Әллә обходындағы әлеге урланған ҡарағас буйынсамы? Улай тиһәң, ул хәлде әле бер кемгә лә һөйләмәне, хатта лесничий ҙа белмәй. Тәүҙә үҙем асыҡлап ҡарайым да, бик тә бик таба алмаһам, протокол төҙөрмөн, тип йөрөй ине... Ярай, барайыҡ, күҙ күрер. Ҡурҡҡандай бер нәмәһе лә юҡ инде, эше урман менән бәйле булғас, болғағы-бысрағы етерлек былай. Диләнкәләре тәртиптә булмаһа, район үҙәгендәге эреле-ваҡлы вазифа биләгән ағай-эненең берәй этлеге тейеп тормаһа... Ильяс, эсенән генә һуңғы арала үҙенең обходынан үлсәнгән-ҡырҡылған диләнкәләрен барлап, тағы аптырауға ҡалды. Улай, өҫтән бәйләнгәндәй бер ни ҙә юҡ, шикелле. Ильяс рулгә ултырыу менән, милиция машинаһы уның алдынан төшөп алды, етмәһә, бик мөһим, кәрәкле кешене оҙатып барғандай итеп былҡылдатып-ялпылдатып уттарын ҡабыҙып ҡуйҙылар! Юлда ҡаршы килгән машина эйәләре, тиҙлектәрен кәметеп, аптыраулы ҡараштары менән оҙата, ә алдан барыусылар юлдың бер яҡ ситенә йылышып, юл биреп ҡала. "Үәт, әй, ағайыңа бөгөн почет..." тип, үҙенең был хәленән көлкөһө килә башланы. Шәп ҡыуа торғас, елдереп кенә район үҙәгенә лә килеп еттеләр. Урам араһына кергәс тә тиҙлектәрен әллә ни кәметмәй, йән-фарман милиция йорто алдына барып туҡтанылар.

**(Дауамы бар).**

✓ *"Тәжрибәле педагогтар менән шөғөлләнә башлағас, ҡыҙым Гөлнур оялсанлығын еңергә өйрәнде. Иғтибар туплауы ауыр ине, хәҙер хәтере яҡшырҙы", - ти асыҡ дәрескә йыйылған әсәйҙәрҙең береһе Зөлфиә Йәмәлетдинова.*



*ӘЙҘӘГЕҘ, ФЕКЕР ҠОРАЙЫҠ!*

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘ - МИЛЛИ ХОЛОҠ





## Ҡолаҡсын һәм көләпәрә

**Башҡорт ирҙәр баш кейемдәре иҫ киткес күп төрлө, бихисаплығы менән хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы менән ярыша ала. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорттар төшөрөлгән француз һәм рус рәссамдарының һүрәттәрендә генә лә бик күп төрлө баш кейемдәрен күрергә мөмкин, уларҙың ҡайһы берҙәренең исемдәре лә билдәһеҙ.**

Башҡорт баш кейемдәренең төп үҙенсәлеге - уларҙың ҡалҡыу булыуы. "...Башҡорттарҙы баш кейемдәре буйынса бер күреүҙән танып була. Ул кеглгә оҡшаған, әммә бигүк осло түгел, бейеклеге бер ҡарыш..." тип яҙа этнограф һәм тарихсы И.Г. Георги (1729-1802). "Уларҙың формаһы сәйер, ҡанаттары һәм елкәне ҡаплаған ҡойроғо бар", тип яҙа В.М. Черемшанский. Ул сәйер баш кейемдәре - ҡолаҡсын һәм көләпәрә. Ҡойроҡ, тип, ул йәнлек ҡойроғон түгел, ә баш кейеменең ҡойроғон атаған. Рустар был баш кейемдәрен малахай тип йөрөтә.

Ҡолаҡсын һәм көләпәрә - бик боронғо баш кейемдәре. Ул Азияның байтаҡ күсмә халыҡтарында осрай һәм хатта боронғо скиф һындарында күреп була уларҙы. Ҡолаҡсынды күбеһенсә ҡыш һәм йылдың һалҡын ваҡытында кейгәндәр, ә көләпәрә йәй көндәре елдән һәм туҙандан һаҡлаған. Уларҙың ҡолаҡтары яурынға тиклем төшөп торған, ә арҡалығы елкәне ҡаплаған. Ыжғыр елдәрҙән һәм ҡарҙан һаҡланыр өсөн иң ҡулайлы баш кейеме.

Ҡолаҡсын күбеһенсә төлкө тиреһенән тегелгән, һарыҡ йәки бүре тиреһенән дә ҡолаҡсындар осраған, өҫтөнән ҡара, ҡыҙыл төҫтәге туҡыма йәки тула менән көпләнгән. Көпләнмәгән ҡолаҡсын бик һирәк осрай, уныһы ла ярлыларҙа, тип яҙа С.И. Руденко. Ҡайһы берҙә ҡолаҡсындың баш өлөшөнә текә формаһын һаҡлау өсөн кейеҙ каркас теккәндәр. Ҡолаҡсынды тышынан уҡа менән биҙәгәндәр. Әйткәндәй, байтаҡ баш кейемдәренең биҙәлеш ҡалыбы ҡалпаҡта ла, ҡолаҡсында ла бер иш. Башҡорттар араһында ла ул ярымкүсмә тормош алып барған ырыуҙарға хас булған, уны бөрйәндәр, тамъяндар, түңгәүерҙәр, ҡарағай-ҡыпсаҡтар, табындар, меңдәр кейгән.

Көләпәрәне туланан йәки кейеҙҙән теккәндәр. Күҙгә ҡояш төшмәһен өсөн, маңлай тирәһе ҡапланыбыраҡ тора, ҡолаҡсындан айырмалы рәүештә, ҡолаҡтары һәм арҡалығы айырым, һәр береһе түңәрәкләп тегелгән. Уҡа урынына төҫлө туҡыманан ҡоршау урындары буйлап тар ғына таҫма һалынған.

Көләпәрәне Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә кейгәндәр: бөрйән, ҡатай, мең, үҫәргән ырыуҙары уны үҙенеке тип атай ала. Шуныһы ҡыҙыҡ: тире ҡолаҡсын һәм кейеҙ көләпәрә төрлө урында таралыу тапҡан, тик бөрйән ырыуы ғына ҡолаҡсын да, көләпәрә лә кейгән.

Йылы көндәрҙә ике баш кейеменең дә арҡалыҡтарын һәм ҡолаҡтарын өҫкә ҡайтарып булған. Бының өсөн сикә тирәһенән ике бау төшөп торған. Уны артҡа ҡушып бәйләгәндәр ҙә, арҡалыҡ менән ҡолаҡтарын ҡыҫтырып ҡуйғандар. Был баш кейеменең яңы реконструкцияларында бауҙы ҡолаҡсындың ҡолаҡ остарына ғына тегеп ҡуялар, әммә был осраҡта уларҙы ҡайтарып, тирләп киткән елкәне асып елләтә алмай юлсы.

Әйтергә кәрәк, ҡолаҡсынды - ҡышҡы, көләпәрәне - йәйге баш кейемдәре тип кенә ҡабул итергә ярамай. А.О. Орловскийҙың һүрәтендә ҡолаҡсын кейгән һыбайлы башҡорт япраҡлы ағас эргәһендә, тимәк, йәй көнө төшөрөлгән. Быға аптырарға түгел: һыбай йөрөгәндә ҡолаҡҡа ел бәрә, шуға ла һыбайлыларҙың йылы баш кейем кейеүгә мохтажлыҡтары бар. Ә кейеҙ көләпәрәне һалҡын көндәрҙә ябай тире кәпәс өҫтөнән кейеп сығыр булғандар.

Бөгөнгө көндә сәхнәбеҙҙә киң таралыу тапҡан, бер йәки ике ҡойроҡ тегелгән төлкө бүрек нәҡ тире ҡолаҡсынға оҡшатып уйлап сығарылған. Ул сәхнә кейеме булараҡ барлыҡҡа килгән, әммә байтаҡ кешеләр уны боронғо баш кейеме, тип яңылыша. Был бүректәр бик үҙенсәлекле, әммә тарихи темаларға һүрәт төшөргән рәссамдар бындай баш кейеменең борон булмауын күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тейеш. Ғөмүмән алғанда, мәктәптәрҙә башҡорт мәҙәниәте уҡытыусылары ғына түгел, рәсем уҡытыусылары ла балаларға халыҡ кейеме тураһында һөйләргә тейештәр, тип уйлайым. Юғиһә, балалар сәхнәләге өлгөләрҙе генә күреп үҫә, халыҡ кейеме шуның менән сикләнәләр, тип уйлай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был баш кейемдәре ҡыш көнө лә, йәйге селләлә лә иҫ киткес уңайлы. Улар елдән һәм ҡояштан, ҡар-ямғырҙан, һыуыҡтан һаҡлай. Сәхнәнән дә бик матур күренә улар. Уларҙы яңыртайыҡ, тарих төпкөлөнән бөгөнгө көнгә ҡайтарайыҡ.**

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*



# УЙЫНДАР УЙНАП ҠЫНА...

**Әле яңы ғына Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев баш ҡалала Башҡорт балалар театр студияһы асып ебәргәйне. Үткән аҙнала иһә студияла шөғөлләнеүселәр ата-әсәләргә һәм тамашасыларға асыҡ дәрес күрһәтте. Йәйге ялдарға таралышыр алдынан студия эшенә бер бәләкәй генә йомғаҡ яһау булды ул.**

"Бында Алһыу апайымды алып килгәйнек, миңә лә бик-бик оҡшап китте әле ул, уйнайҙар ҙа уйнайҙар. Их, тағы ла каратэға, ҡылыс менән һуғышырға ла өйрәтһәләр..." - тип серен уртаҡлаша 6 йәшлек Вилдан Абдуллин атлы егет. Дәрестәр, ысынлап та, бик күңелле үтә, ахыры, башҡортса ғына һөйләшәләр, уйындар уйнап телмәрҙәрен, иғтибарлылыҡтарын, һығылмалылыҡтарын үҫтерәләр. "Тәжрибәле педагогтар менән шөғөлләнә башлағас, ҡыҙым Гөлнур оялсанлығын еңергә өйрәнде. Иғтибар туплауы ауыр ине, хәҙер хәтере яҡшырҙы. Үҙен медицина өлкәһендә күрергә теләй, ә был студия беҙгә аралашырға, ҡыйыуыраҡ булырға өйрәтә. Мәктәптән арып ҡайтһа ла, килергә атлығып тора", - ти асыҡ дәрескә йыйылған әсәйҙәрҙең береһе Зөлфиә Йәмәлетдинова. Уның һүҙҙәрен Рәшиҙә апай Абдуллина ла йөпләй. "Ҡыҙым үҙен иркен тотһон, кеше араһында үҙ һүҙен әйтә белһен", - тип уйлап алып килгәйнек, һис үкенмәйбеҙ. Уҡытыусыларға - Хөрмәтулла Ғаззали улына, Рима Тәлғәт ҡыҙы Харисоваға, Фәнис Вәкил улы Рәхмәтовҡа рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ", - ти ул.

Бала үҙ милли мөхитендә тулыраҡ асыла - был белгестәр тарафынан күптән раҫланған. Төп маҡсаты баланы театр сәнғәте аша үҫтереү булған студия ошоно күҙ уңында тотоп эшләй ҙә инде. Баш ҡалабыҙҙа балалар өсөн милли мөхитте тағы ла киңәйтеп ебәргән был студия шуның өсөн дә шунда уҡ киң танылыу яулағандыр ҙа.

- Өфө өсөн был студия шул тиклем кәрәк ине. Сөнки башҡорт балалары ҡала мөхитендә бар ерҙә лә үҙ телендә аралаша алмай, сит телдә фекерҙе әйтеү ҙә ауырыраҡ. Халҡыбыҙҙы һүрәтләүсе сифаттар араһында баҫалҡылыҡ та бар, башҡа милләттәр кеүек ҡыйыу түгелбеҙ, йомоҡбоҙ. Баланы донъяға асып сығарып ебәрәсәк был студия. Уның башланғысында торған рухлы зыялыларыбыҙҙың береһе Хөрмәтулла Үтәшевтың батырлығы, алдан күрә белеүсәнлеге хайран итә. Бөгөнгө балалар - ул беҙҙең киләсәк, халҡыбыҙ уларға күҙ төбәп торасаҡ алдағы көндәрҙә, - Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, журналист, шағирә, драматург Зөһрә Фәйзуллинаның хаҡ һүҙҙәренә өҫтәп тағы ни әйтәһең инде! Ысынлап та, башҡорт донъяһында ҙур бер күренеш булды был студия.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле өс ай самаһы ғына эшләп өлгөргән башҡорт студияһынан ата-әсәләр ҙә һәм, иң мөһиме, балалар үҙҙәре бик ҡәнәғәт. Мәҫәлән, быйыл 7-се класты тамамлаған, киләсәктә актер булырға хыялланған Регина Ғибәҙуллина дәрестәргә хатта Иглин районынан автобус менән йөрөргә лә ҡыйынһынмай. Башҡорт балалар театр студияһының изге башланғысын күтәреп, өфөләрҙе уның өлгөһөнә эйәрергә саҡырабыҙ. Сөнки ниндәй һөнәр һайлаһалар ҙа, балаларыбыҙ, тәү сиратта, ғәмле, сәмле, рухлы булып үҫергә тейеш.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

## "Атайҙы Айға ебәрәйек"

Өйҙә Рәшит һис тик тора алмай, бала бала инде: йә һикерә, йә туп уйната, өй яңғыратып ҡысҡырып та ебәрә. Атаһы эш менән мәшғүл, ниҙер яҙа, малайҙы иҫкәртеп тыйып та ҡуйғылай. Рәшит әсәһенә: "Атайҙы Айға ебәрәйек, унда тыныс булыр уға", - тимәһенме. Бергәләп көлөшәләр. Айға осоу балалар өсөн уйын ғына һымаҡ тойола. Улар ҙа заман менән бергә үҫә шул.

## Хыялдар

Рәсүлгә телефон бүләк иттеләр, йәнәһе, бәләкәйҙән үк һөйләшергә өйрәнһен. Хәҙерге бала-саға бишектән белә бит уны. Малай көн буйы телефондан һөйләшә, уйнай, ашауҙы ла онота. Ахырҙа, атаһы телефонды йәшереп ҡуя. Малай ятып алып хыяллана: "Минең биш балам булыр моғайын, уларға телефон алырмын, йәйгеһен ауылға өләсәйгә китербеҙ ҙә, туйғансы уйнарбыҙ. Атай һымаҡ, мин уларҙың телефонын йәшермәм. Беҙ ауылда булғас, атай беҙҙең телефондарҙы ала алмаясаҡ". Төплө хыял менән бала зыялының алышына башлауы шулдыр инде.

## "Саморез ал"

Гөлбикә инәй магазинда торһа, улы шылтыратып: "Биш-алты саморез ал", - ти. Инәй фонарик тип аңлай. Шулай ҙа 5-6 бәләкәй фонарик алып ҡайта. Көләләр ҙә, саморез сөйөнә алыштырып алып ҡайталар. Кеше үҙе генә түгел, ҡолаҡ та ҡартая шул.

## "Һаубыҙ әле, үтегеҙ"

Гөлбаныу инәй дини китаптарын ҡарап, уҡынып ултыра. Ишек асыла, кемдер һаулыҡ һорашҡандай була. Инәй: "Һаубыҙ әле, үтегеҙ, үт, кем килде шул?" - тип алғы яҡҡа сыға. Унда бәләкәй ейәне ҡул йыуып тора, үҙе көлә: "Ашың йылымы, тип һорайым, өләсәй", - ти. Бына ҡайҙа ул олоғайыуҙың, ысын ҡартлыҡтың әтнәкәһе - бер һүҙҙе икенсегә әйләндерәһең.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

✓ ***Бик яуаплы ҡараған байрамға белореттар. Төрлө-төрлө һауыттарҙағы буҙалар, күҙ ҡыҙҙырып бызылдап, рәт-рәт булып ултырыша. "Эх..." тип уйлап өлгөрмәйһең, ҡойоп та бирәләр!***

ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР КӘЙЕФТӘН...

## яңы дарыу

■ Пенсильвания университеты белгестәре 66 мең Twitter ҡулланыусы кешеләрҙең аватарын махсус программа ярҙамында анализлаған. Аватар - билдәле бер кешене виртуаль ысынбарлыҡта күрһәтә торған һүрәт. Тикшеренеүҙәрҙә шулай уҡ 434 кеше асыҡлыҡ, намыҫлы булыу, башҡаларҙан айырылып торорға яратыу, күндәмлек, тиҙ ярһып китеүсәнлек кеүек сифаттарҙы асыҡларға ярҙам итеүсе һорауҙарға яуап биргән. Билдәләнеүенсә, ярһыу кешеләргә үҙенең негатив тойғоларын тыйыуы ауыр, улар үҙҙәренең фотоһын түгел, ә йәнлек йә биналар һүрәттәрен ҡуя. Күндәм кешеләр тормошто ярата, улар барыһы менән дә дуҫ һәм йышыраҡ йылмаялар. Аватарҙа улар йылмайып тора йәки башҡа кешеләр менән уйнап йөрөй. Намыҫлы кешеләрҙең бөтөн ерҙә тәртип була, фотоларҙа улар, ғәҙәттә, өлкәнерәк күренә. Етмәһә, фотола улар йышыраҡ күҙлектә, зауыҡлы кейемдә була. Башҡаларҙан айырылып торорға күнеккәндәрҙең фотоһы сағыу, улар үҙ йәшенән йәшерәк күренергә тырыша. Асыҡ кешеләр эксперименттарға барыуҙан баш тартмай, улар үҙҙәре моңһоу йәки яуыз булып күренгән ҡаралы-аҡлы фотолар менән дә уртаҡлаша ала.

■ Аджу университеты ғалимдары Көньяҡ Кореяның 6 колледжында уҡыған студенттар араһында һорау алыу үткәргән һәм гүзәл заттарҙың 52 проценты смартфонына көнөнә 4 сәғәттән ашыу ваҡыт бүлеүен асыҡлаған. Сағыштырыу өсөн: ир-егеттәр араһында ошо ваҡыт буйына телефонға текәлеп ултырыусылар 29 процент ҡына. 23 процент - ҡатын-ҡыҙ һәм яҡынса 11 процент ир-ат смартфон менән көнөнә 6 сәғәт ҡуллана. Ҡатын-ҡыҙҙарға смартфон социаль селтәрҙәргә инеү өсөн кәрәгерәк. Улар кемгәлер шылтыратыу, уйын уйнау, ниндәйҙер мәғлүмәт эҙләүгә ҡарағанда Facebook һәм Instagram-ды йышыраҡ ҡуллана. Ир-егеттәр буш ваҡыты булғанда ғына мобиль телефонын иҫенә төшөрә. Шул уҡ ваҡытта һәр бишенсе ҡатын-ҡыҙ (20,1 процент) һәм 8,9 процент ир-егет телефон менән ҡулланыу ҡағиҙәләрен бөтөнләй белмәй.

■ Ауырлы саҡта eләк-емеште күберәк ашаған ҡатын-ҡыҙҙарҙың балалары юғары интеллект менән айырылып тора, тип белдерә Канада ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә 808 бала ҡатнашҡан. Буласаҡ әсә көн һайын ҡулланған бер порция емеш-еләк тест һөҙөмтәләрен уртаса 2,38 процентҡа күтәргән. Ә бына клетчаткаға, Омега-3 кеүек майлы кислоталарға бай ризыҡтарҙың тест һөҙөмтәләре күрһәткестәренә бер ниндәй ҙә йоғонто яһамаған.

■ Тиҙҙән дарыуханаларҙа "насар кәйефтән" таблеткалар барлыҡҡа килеүее ихтимал. Уны Австралия ғалимдары төркөмө тәҡдим итмәксе, әлеге көндә улар тикшеренеүҙәрҙе тамамлай. Әлегә билдәле булыуынса, яңы препарат 5 тәбиғи компоненттан торасаҡ. Сифаты буйынса ул антидепрессанттарға ҡарағанда яҡшыраҡ буласаҡ, ти улар. Ябай психотроп матдәләргә ҡарағанда, таблетканың әүҙем механизмы кеше мейеһенең химик процестарына йүнәлтелә. Дарыу составына ингән матдәләр араһында фолий кислотаһы, цинк, башҡа мөһим элементтар бар. Шулай уҡ төп компоненттарҙы үҙләштереүгә ярҙам итеүсе матдәләр бар. Белгестәр раҫлауынса, яңы дарыу нервы көсөргәнешенән, депрессив хәлдән сығырға ярҙам итәсәк.

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# УЛАРҒА ТАЯНЫП БУЛА...




**Бөгөн республикала иң әүҙем йәмәғәт эштәре алып барыусылар - улар ағинәйҙәр. Аҙна һайын уларҙың ниндәйҙер бер төбәктә олоғара саралар үткәргәнен ишетергә лә, барып күрергә лә тура килә. Ә инде тауышһыҙ башҡарғандарын, район-ауылдарҙа алып барған тәрбиә эштәрен һанап бөтөрлөк тә түгел.**

Халҡыбыҙҙың инде онотола барған ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, кәсептәрен һәм, әлбиттә, ашһыу төрҙәрен дә тергеҙеүҙе үҙ бурысы итеп алған ағинәйҙәр. Белорет районының Сосновка ауылында ойошторолған Буҙа байрамы ла ошо маҡсатты күҙҙә тотто. Сосновка, Үткәл, Әхмәр, Ҡаһарман, Рысыҡай ауылы ағинәйҙәре милли эсемлегебеҙҙе пропагандалау һәм уны эшләүҙең үҙенсәлекле алымдарын өйрәнеү, тәжрибә уртаҡлашыу өсөн йыйылды бында.

- Беҙҙең яҡтарҙа буҙа ҡойоу әллә ни таралмаған, шулай ҙа уның онотола башлаған милли эсемлегебеҙ икәнен күҙ уңында тотоп, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ был байрамда бик теләп һәм сәмләнеп ҡатнашты. Эсемлекте ниндәйҙер бер фольклор күренеше менән сәхнәләштереп тәҡдим итеүҙәре оҡшаны. "Урыҫлашып барған" тигән белореттарҙың бындай колоритлы, сағыу, рухлы тамаша ҡороуына хайран булып торам. Тимәк, бар беҙҙә ҡот та, рух та һәм башҡа милли һыҙаттар ҙа. Уларҙы бары ошолай уятып алырға ғына кәрәктер. Зилә Абзалова етәкселегендәге район ағинәйҙәре шулай эшләй ҙә инде, онотолғанды тергеҙә, яңы һулыш өрөп ебәрә, - тине Белорет ҡалаһының Яныбай Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһы директоры Зөлфиә Ғәлимйәнова.

Ысынлап та, бик яуаплы ҡараған байрамға белореттар. Төрлө-төрлө һауыттарҙағы буҙалар, күҙ ҡыҙҙырып бызылдап, рәт-рәт булып ултырыша. "Эх..." тип уйлап өлгөрмәйһең, ҡойоп та бирәләр! Татлыһын да, шәрбәтләрәген дә, әскелтемен дә, майлырағын да, ҡуйырағын да... Шундай ризыҡты тәмләп, йәнеңә яғылдырып, уны тикшереп, баһалап тороу ҙа яҙыҡ һымаҡ. Шунлыҡтан, беҙ был эште жюри ағзаларына ҡалдырып, буҙа менән ләззәтләнеп, сәхнәләге йола күренештәрен ҡараныҡ һәм ағинәйҙәр менән аралаштыҡ.

- Беҙ ауылдарҙа ағинәй булыуҙың мотлаҡ өләсәй йәшенә етеү түгеллеген аңлата йөрөйбөҙ. Ағинәй - ул үҙен һәм эргә-тирәһендәгеләрен тәрбиәләргә, үҫтерергә, яҡшылыҡҡа өндәргә тейешле милләт әсәһе, тибеҙ. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, байрамыбыҙҙа ла күберәген йәштәр, баҫҡан еренән осҡон сәсрәтер килендәр, еңгәләр, апайҙар ҡатнаша. Ойошмабыҙҙа ла ошондай ағинәйлек дәрәжәһен һанлаған, ағинәй булырға ынтылған ҡатын-ҡыҙҙар йылдан-йыл арта. Үҙ идеялары, теләктәре менән килгәндәр күбәйә, йырға-бейеүгә, ҡул эштәренә маһирҙар, йәмәғәт эштәрен һөйгәндәр, йәмғиәтебеҙ киләсәгенә битараф булмағандар ылыға бында. Быйыл Ғәбдүк, Ҡаһарман, Рысыҡай, Әхмәр ауылдары ҡушылды беҙгә. Шығай, Сосновка, Үткәл, Уҫманғәле, Инйәр, Йөйәк, Береш ауылдары ағинәйҙәре былай ҙа әүҙем эш алып бара, балалар баҡсаларынан башлап, ауыл экологияһына тиклем уларҙың иғтибар үҙәгендә. Быйыл ҡыш Шығай ауылында ике ғаилә янғын бәләһе менән өйһөҙ ҡалды һәм ағинәйҙәр өйҙән-өйгә йөрөп, аҡса йыйып, кәрәк-яраҡ туплап, бисараларға ауыр мәлдәрен кисерергә ярҙам итте. Шулай уҡ эскелек һаҙлығына батҡан ғаиләләр, айырым ҡатын-ҡыҙҙар менән дә эшләйбеҙ, был афәттән ҡотолдороу юлдарын эҙләйбеҙ, төрлө сараларға йәлеп итәбеҙ, - тип һөйләй Белорет районы "Ағинәйҙәр ҡоро" рәйесе Зилә Абзалова.

Ысынлап та, оло байрамға әйләнде буҙасылар бәйгеһе. Йыйылған халыҡ ҡулдан-ҡулға йөрөтөп ҡотло ҡулдар емеше булған эсемлектәрҙе тәмләне, баһаларға ярҙамлашты. Оҫтабикәләрҙе атаҡлы ҡурайсы, уҡытыусы-ветеран, абруйлы аҡһаҡал Мөхәмәт Түләбаев сәләмләне. Урындағы хакимиәт башлығы Айгиз Динислам улы Мусин буҙасыларға бүләктәр өләште, ағинәйҙәргә таянып булыуын, бер әйтеүҙән уларҙың дәррәү күтәрелеп, онотола башлаған йола байрамдарын, күләмле сараларҙы ойоштороп, ауыл йәмәғәтселеген туплауға ҙур өлөш индереп йәшәүе хаҡында ғорурланып һөйләне. Ағинәйҙәр бәйге тотҡан, ә халыҡ уларҙы дәррәү алҡышлаған арала, тыштағы усаҡ өҫтөнә аҫылған оло ҡаҙандарҙа ит өлгөрҙө. "Эй, халҡымдың матур йолалары!" тип ирәйҙе сараға йыйылған һәр кем.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# ТӘН СӘЛӘМӘТЛЕГЕН...

## йән тыныслығы ҡурсалай



**Сәләмәтлек - ул тәбиғәттән һәр кемебеҙгә бирелгән ҙур бүләк. Тик һәр кеше тыуғанда уҡ башҡаларға оҡшамай, йәғни уның тән төҙөлөшө лә, йән көйләнеше лә үҙенсәлекле, үҙенә генә хас. Шуға ла, һәр кем - үҙенә-үҙе генә күрһәтмә һәм өлгө, сөнки бер кешенең тәжрибәһе икенсе кешегә тап килмәй.**

Бөгөн йәштәр, бигерәк тә йәш ҡыҙҙар, мода артынан ҡыуып, ҡышын да эстәре, билдәре күренеп торған кейемдә йөрөй. Ә бит улар - буласаҡ әсәйҙәр. Уларға үҙҙәренең генә түгел, ә тыуасаҡ быуындың сәләмәтлеген һаҡлау бурысы ла йөкмәтелгән, шуны аңлаһындар ине. Эйе, кемдеңдер организмы бындай стресты күтәрә ала һәм ул әсә булыу, бала һөйөү бәхетенә өлгәшә, ләкин күпселек унан мәхрүм ҡала. Бының менән нимә әйтергә теләйем - сәләмәтлекте йәш саҡта һаҡларға кәрәк. Олоғайғас, ҡалған һаулығыңды яҡларға ғына була.

Үҙемә килгәндә, спиртлы эсемлектәр эсмәйем, тәмәке тартмайым. Актив рәүештә спорт менән шөғөлләнәм, тип әйтә алмайым, иртән йүгермәйем дә, ултырыу мөмкинлеге булһа, баҫып тормайым. Күңелгә оҡшағанды эшләйем, тамаҡ теләгәнде ашайым. Һәр нәмәлә сама белеү кәрәк, тигән принципты эштә лә, ялда ла тоторға тырышам. Сөнки артыҡ эшләү ҙә, артыҡ ял да организмды талсыҡтыра. Яманлыҡ уйламайым, яҡшылыҡ ҡылырға тырышам. Тән сәләмәтлеген йән тыныслығы ҡурсалай икәнлегенә инанғанмын.

Шуға ла бөйөк "Урал батыр" эпосынан алынған түбәндәге юлдар минең тормош кредома ла, сәләмәтлегемде һаҡлау принциптарына ла тап киләләр, тип, уны үҙемә девиз итеп алғанмын:

*Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ;*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ!*

**Рөстәм НУРЫЕВ.**
**Башҡорт википедияһы хакимы.**

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

**Бөтә донъяла, төрлө ил ҡәүемдәрендә ижтимағи тормошҡа, көнитмешкә, шәхси сифаттарға, әхлаҡ-әҙәпкә бәйле меңәр йылдар буйына ҡулланылған, йола-ҡағиҙәгә әйләнгән эш-ҡылыҡ тәртиптәре, ғөрөф-ғәҙәттәр, аманаттар бар. Улар оҙайлы ваҡыт ҡат-ҡат һыналып, күп ҡабатланып, ырыу, йәмғиәт ағзаларының ғәҙәтенә кергән. Йәшәйешкә ҡағылған, кешеләрҙең холҡон, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен көйләүгә ҡоролған йола-ҡағиҙәләр араһында тыйыу, әйтәйек, берәй эш-ҡылыҡҡа рөхсәт бирмәү, уны туҡтатыу, ғәмәлгә ашырмау, бәғзе теләккә, хис-тойғоға, кисереш-ярһыуға, тотанаҡһыҙлыҡҡа, тәртипһеҙлеккә ирек ҡуймау кеүек ғәҙәттәр ҙә бар.**

# ТЫЙЫЛҒАНДАН - ТЫЙЫЛ, ТИГӘН...



### Аллаһы Тәғәлә әмере

Тыйыу кешеләргә, ғаиләгә, ырыуға, ҡәрҙәштәргә, ғөмүмән, йәмғиәткә, йорт-илгә имен, ырыҫлы йәшәү өсөн ҡулланылған йола, ҡанун булған. Уны тотмағандар бәлә-ҡаза күргән, язаға тарттырылған. Табу, тыйыу вә аманаттар йыйымы, әхлаҡи ҡанундар һымаҡ, боронғо мифологияла, йәғни риүәйәттәрҙә, хикәйәттәрҙә сағылыш тапҡан. Билдәле булыуынса, тыйыу - Аллаһы Тәғәлә биргән әмер һәм уны боҙмау, асылдан тайпылмау фарыз. Дини хикәйәттәрҙә тасуирланыуынса, Һауа (Ева) йылан йәки иблис ҡотҡоһона әүрәп, Әҙәм уға эйәреп, ожмах баҡсаһында изгелекте һәм яуызлыҡты танып белеү ағасынан тыйылған емеште ауыҙына ала. Аллаһы Тәғәлә әмерен боҙоу, яңылышыу Әҙәм менән Һауаны һәм бөтә кешелек донъяһын ыҙа сигеүгә, бәхетһеҙлеккә төшөрә. Илаһ тарафынан яза бирелеп, Әҙәм ҡатыны менән ожмахтан ҡыуыла, үҙҙәре лә, нәҫелдәре лә тәғәмен, икмәген тиргә батып табыуға дусар ҡылынып, үлемһеҙлектән мәхрүм ителә. Шулай итеп, гонаһ ҡылыу әҙәм затының төп асылын, тәбиғәтен, булмышын үҙгәртә, кеше әхлаҡи йәһәттән Хоҙай яралтҡан өлгөһөн, рәүешен юғалта. Илаһ юлынан тайпылыу бына шулай башлана. Тыйыуҙы изге һанамай, һанға һуҡмай эш итеүселәр, йолаларҙы, ҡағиҙәләрҙе боҙоусылар тән йәки йән яфаларына дусар була.

Илаһ хасил иткәнде, ҡушҡанды һанламау, ҡәҙерләмәү - иң гонаһлы эш-ҡылыҡ, һис ҡасан ярамаған, ғөрөф-ғәҙәткә һыймаған яҙыҡ. Боронғо йәһүд риүәйәтендә изге каста башы Аарондың улдары Надав менән Авиуд сакраль йөкләмәләрен үтәүҙең тәүге көнөндә үк Яхвеның уты менән ялмана. Сөнки улар, серле ут ҡабыныуҙы көтмәйенсә, "ят ут" тоҡандыра. Аарон йәнә үгеҙ ҡиәфәтендә алтын тәре яһай һәм ботҡа табыныуға һалынған тыйыуҙы үтәмәүе менән Яхвеның нәфрәтен тыуҙыра, Моисейҙың яҡлауы арҡаһында ғына ҡотолоп ҡала.

Яхве илаһ тәүге пәйғәмбәр Моисей аша Синай тауында ун дини ҡанун, йәғни Хоҙай алдында инсандың (кешенең) тәртибен тәьмин иткән, холҡон көйләгән тыйыуҙар, әмерҙәр ебәрә. Быға тағы ла йола, әхлаҡ, хоҡуҡ сифатындағы байтаҡ ҡушыуҙар өҫтәлә. Был хоҡуҡи һәм этик нормалар дин, ғаилә, йәмәғәт, граждандыҡ нигеҙҙәре һымаҡ ҡабул ителә: бер Аллаға табыныу, ғаилә, шәхес, йәмғиәт именлеге, ата-инә абруйы, ир-ҡатын, енси мөнәсәбәттәр әҙәбе...

Тарихҡа баҡһаҡ, тәүтормош ҡәүемдәрендә һәм артабанғы йәшәйештә афәт, бәлә-ҡаза хәүефенән ҡурсаланыр, ҡотолор өсөн берәй нәмәгә, эш-ҡылыҡҡа, ниндәйҙер һүҙгә табу һалынған. Табу кешене, көнкүреште тейешле ҡағиҙәләргә буйһондорған. Буйһонмағандар илаһи көстәр тарафынан язаланасағына ышандырылған. Көнитмеш, ижтимағи тормош йолаларға, ҡанундарға ярашлы булырға, кешеләр иһә тыйыуҙарға күнергә бурыслы. Бер әкиәттә батша әйтеүенсә: "Батшалығымдың һауаһы шундай: кем дә кем буйһона - шул иркен тын алып, рәхәт йәшәй, кем буйһонмай - шул тыны ҡыҫылып, интегеп үлә".

Боронғо Ҡытай сығанаҡтарынан мәғлүм булыуынса, мәшһүр дәүләт төҙөүсе Киджа халҡын йолаларҙы үтәргә, ғәҙеллеккә, төрлө кәсептәргә өйрәтә, һигеҙ тыйыу һала. Кешеләр өйҙәрен бикләмәй, урлашыу, әҙәпһеҙлек бөтә. Этик нормалар, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт ҡағиҙәләре теркәлгән "Бөйөк закон" (Хунь фань) көнкүреште күркәм, ҡотло итә. Шулай итеп, йолалар, әхлаҡ-әҙәп нормалары, тыйыуҙар йорт-ил ырыҫын, именлеген тәьмин итә, улар этик, эстетик, педагогик, социологик һәм хоҡуҡи әһәмиәткә лә эйә.

Дөрөҫ йәшәү рәүеше ҡағиҙәләре күрһәтелгән, күркәм әхлаҡҡа, сафлыҡҡа өндәгән, кешеләрҙең күңел күҙҙәрен асыусы бер нур, иманлылар өсөн тура юл булған изге Ҡөрьәндә лә байтаҡ тыйыуҙар тәҡдим ителгән:

- Улар Алланан башҡа икенсе илаһҡа доға ҡылмай, Алла харам ҡылған йәнде хаҡһыҙға үлтермәй һәм уйнаш ҡылмай. Әгәр берәй бәндә быны эшләһә, язаһын алыр.

- Ысынлап та, Алла ғәҙел булырға һәм изгелек ҡылырға, яҡындарға бүләк бирергә ҡуша, зина ҡылыуҙан, тыйылғанды эшләүҙән, кешеләргә йәбер-золом ҡылыуҙан тыя.

- Эй, улым! Намаҙға тор, яраҡлы тип табылған эшкә дәртләндер, яраҡһыҙ эштән тый һәм һиңә нимә ҡағылһа ла сабыр ит... Кешеләр алдында сырайыңды һытма, Ер йөҙөндә маһайып йөрөмә. Һәр тәкәбберҙе, маҡтансыҡты Алла яратмай! Йөрөшөңдө самалап, уртаса йөрө, тауышыңды түбәнәйт.

- Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Күп уйҙарҙан һаҡланығыҙ, сөнки ҡайһы бер уйҙар - гонаһ. Шымсылыҡ ҡылмағыҙ, бәғзеләрегеҙ икенселәрегеҙ тураһында ғәйбәт һөйләмәһен.

- Һәр хурлыҡлы ант итеүсегә буйһонма: яманлаусыға, ғәйбәт таратып йөрөүсегә, яҡшылыҡтан тыйыусыға, енәйәтсегә, гонаһлыға, тупаҫҡа, бынан һуң нәҫел-нәсәпһеҙгә.

- Һис бер иманһыҙға һәм гонаһлыға эйәрмә.

- Изгелектә һәм тәүәккәллектә берберегеҙгә ярҙам итегеҙ, дошманлыҡта һәм гонаһта ярҙам итмәгеҙ.

- Белмәгән нәмәгә эйәрмә! Ҡолағың, күҙең һәм күңелең һине яуапҡа тартыр.

- Етемдәр балиғ булғанға саҡлы уларҙың малына яҡын килмәгеҙ, килешеүҙе үтәгеҙ. Етемде йәберләмәгеҙ.

- Үлсәүҙе дөрөҫ ҡылығыҙ, үлсәгән ваҡытта дөрөҫ үлсәгес менән үлсәгеҙ.

- Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Бер халыҡ икенсе халыҡты мәсхәрә итмәһен, ихтимал, тегеләр быларҙан яҡшыраҡтыр, бер ҡатындар икенсе ҡатындарҙан, ихтимал, яҡшыраҡтыр. Үҙ-үҙегеҙҙе хурламағыҙ, ҡушамат исем аташмағыҙ.

- Туғандарға тейешлеһен бир һәм ярлыларға, юлсыларға исраф ҡылма.

Ҡөрьәндә иң мөһиме - Нур. Әле килтерелгән тыйыуҙар был нурҙы көсәйтә, балҡыта ғына. Быны ентекләберәк төшөндөрәйек. Изге китапта әйтелгәнсә, кем Алланың тыйған нәмәләрен ололаһа, был уға Раббыһы ҡаршыһында хәйерлерәк. Диндарҙарға Уның мөхәббәте шундай даирәле вә сикһеҙ, бөтә тыйыуҙары ла шәхесте, ғаиләне, йәмғиәтте күркәмләндереүгә, яҡшыртыуға, юғарыға күтәреүгә бағышланған, кешеләрҙе рухи яҡтан камил, бәхетле итеүгә йүнәлтелгән. Тыйыуҙарҙы тотоуға ынтылыу эске нурҙан, яҡтылыҡтан, хәҡиҡәтте төшөнөргә, тойорға күңел менән тартылыуҙан килә. Хоҙай Тәғәлә аҡылы бәндәләрҙе үлем өсөн йәшәргә һәм йәшәү өсөн үлергә өйрәткән. Был күк көмбәҙенән таралған яҡты балҡыш һымаҡ илаһи нур булып "Урал батыр" эпосында ла сағылған.

Үлем күрә алмай ҡаңғырған ҡарт үлемһеҙлеккә бәйле илгә йола булырҙай шундай мәңгелек тыйыу әйтә:

*Донъяла мәңге ҡалам, тип,*
*Донъялай ғүмер һөрәм, тип,*
*Үлемгә буй бирмәҫкә,*
*Уны йола итмәҫкә,*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ,*
*Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ…*
*Мәңге ҡалам, тимәгеҙ,*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ.*

Эпоста раҫланыуынса, "донъяла мәңге ҡалыр эш, донъяны матур төҙөгән, бағты мәңге биҙәгән - ул да булһа яҡшылыҡ".

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Етенсе сер: үҙ исемеңдәге корпорация

Тикшереү маҡсатында Аңдың өс төп элементын айырайыҡ: Аң, Төпкө аң һәм Юғары аң. Әммә һеҙҙең өс аңығыҙ бар тип уйлай күрмәгеҙ. Минең һәм һеҙҙең һауағыҙ булмаған кеүек. Бары тик бер дөйөм һауа бар һәм һәр ҡайһыбыҙ уның өлөштәре менән файҙалана. Аң менән дә шулай уҡ. Аңығыҙ һеҙ файҙаланған Универсаль аңдың бер өлөшө генә һәм ул өс элементтан тора. Улар араһында аныҡ сиктәр билдәләү еңел түгел, ләкин атамалары бик тә аныҡ.

Уңышлы ижади тормош һәм үҙ-үҙеңдә ышаныс формалаштырыу өс элементты тәрән белеүҙе һәм уларҙың төп функцияларын аңлауҙы талап итә. Мин был бер-береһе менән хәбәрҙар булып эшләгән берлектәге предприятиены үҙ исемеңдәге корпорация тип атайым.

Беҙҙең менән хис-тойғо, интеллектуаль, физик һәм рухи өлкәлә булған бөтөн нәмә барлыҡ хистәребеҙҙе, уйҙарыбыҙҙы, тойғоларыбыҙҙы, образдарҙы, тауыштарҙы һәм тышҡы донъя стимулдарын аныҡ тормошҡа ашырырға һәләтле ҡеүәтле көс булып торған аңыбыҙҙың сағылышы ул.

Күҙҙәрегеҙ тураһында һәм уның күреү мөмкинлеге биргән мейегеҙ менән ниндәй берҙәмлектә эшләүен уйлағыҙ. Ғәмәлдә һеҙ күҙ менән күрмәйһегеҙ. Улар мейегә һеҙ "күргән" объекттың образы проекцияһы тураһында сигнал ебәрә. Электр пульстары - һеҙ аңдың эске донъяһында ентекле эшләгән бөтөн нәмәне эске донъяла сағылдырырға һәләтле энергия формалары. Аңығыҙҙы контролдә тотоп, һеҙ тормошоғоҙҙо ла контролләйһегеҙ.

Ғалимдар шуны асыҡлаған: атом тарҡалғанда ҙур күләмдә энергия ташлана, хатта беҙ Йыһанда уның күҙгә күренмәҫ тулҡындарын тоя алабыҙ. Был көс хаҡында Мөхәммәт (с.ғ.с.) былай тигән: "Атомды тарҡатығыҙ һәм уның эсендә ҡояш күрерһегеҙ". Һеҙҙең аңығыҙ атомдарҙы тарҡатыусы ҙур циклотрон. Ул уйығыҙҙа һүрәтләгән бөтөн нәмәгә форма бирергә һәм уны ысынбарлыҡҡа әйләндергән ижади энергия ағымын азат итергә һәләтле. Уйҙағы идея теләгән бер хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн кәрәк булған барлыҡ элементтарҙы тартып килтереү һәләтенә эйә.

Ракеталарҙы сикһеҙ ваҡыт һәм киңлеккә осороу арҡаһында Йыһанда ҡеүәтле электромагнит көстәре табыла. Улар тартыу һәм этәреү ҡанундары, йәғни ерҙең, Ҡояштың һәм йондоҙҙарҙың тартыу көсөн контролдә тотоусы ҡанундар буйынса йәшәй. Шуға оҡшаш электромагнит көсө электрҙы идеаль үткәреүсе - тоҙло шыйыҡса - ҡан ярҙамында беҙҙең мейелә эшләй. Бары тик мейенең нерв импульстары бер мәлдә тәндең бөтөн өлөштәренә таратылыуын тәьмин итеүсе система булдырған Интеллект тураһында уйлағыҙ. Шул уҡ Интеллект аңығыҙ ярҙамында мейегеҙ нимә һүрәтләй һәм нимә һаҡлай, шуларҙың барыһын да ысынбарлыҡҡа күсерә.

Электр магнетик көскә эйә. Бөтөн донъя электр менән һуғарылған. Һеҙҙең тәнегеҙ кеүек. Һеҙ был дәлилде яҡшы аңлап, үҙегеҙ хыялланған нәмәләрҙе кире ҡағырға түгел, ә уларҙы тартып алыу өсөн магнетизмығыҙҙы тупларға тейешһегеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 13 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Молодые". Худ. фильм (12+).
08.00 "Очная ставка". Худ. фильм (12+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Следуй за мной" (16+).
10.40 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.45 "Гости по воскресеньям"
13.40 "Свадьба в Малиновке". Непридуманные истории" (16+).
14.45 "Свадьба в Малиновке". Музыкальная комедия.
16.35 "Турецкий гамбит". Детектив (12+).
19.00 "Эээх, Разгуляй!" Концерт (12+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.50 Чемпионат Европы по футболу-2016. Сборная Бельгии - сборная Италии. Прямой эфир из Франции.
02.00 "Царство небесное". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.40 "Не отрекаются любя..." Мелодрама (16+).
09.20 "Сваты-3". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Сваты-3". Комедийный сериал (16+).
17.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. Испания - Чехия. Прямая трансляция из Франции.
20.00 "Вести".
20.40 "Сваты-3". Комедийный сериал (16+).
00.25 "Любовник". Драма (16+).
02.30 Торжественная церемония закрытия XXVII кинофестиваля "Кинотавр".
03.50 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Гладиаторы Рима" (0+).**
**09.30, 02.30 "Стеклянный пассажир". Худ. фильм (12+).**
**10.15 "Горький мед", "Енмеш", "Кровать" (12+).**
**11.00 Новости недели (12+).**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Салават Юлаев". Худ. фильм (6+).**
**13.30 "Историческая среда" (12+).**
**14.00 "Ирәндек мондары-2016" (12+).**
**16.00 Т.Гарипова. "Девушка с монистами" (12+).**
**17.30 "Приключения Гекльберри Финна". Худ. фильм (6+).**
**19.30 "У дачи" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 1/4 финала Межрегиональной лиги КВН (12+).**
**21.30 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**22.30 "Сватовство гусара". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**23.45 А.Островский. "Без вины виноватые" (12+).**
**02.15 "Весело живем" (12+).**

## 14 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.00 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 17-я и 18-я серии (12+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Структура момента" (16+).
01.25, 03.05 "Теленовости". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Фальшивая нота". 1-3 серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Вести.doc" (16+).
01.50 "Иммунитет. Код вечной жизни", "Приключения тела. Испытание страхом".
03.25 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Защитница". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.45 "Красная кнопка" (16+).**
**16.45 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (0+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.30 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Вердикт". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Р.Солнцев. "Наш одуванчик" (12+).**

## 15 ИЮНЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 19-я и 20-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Политика" (16+).
01.25, 03.05 "Короли бильярда". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. Россия - Словакия. Прямая трансляция из Франции.
19.45 "Вести. Дежурная часть".
20.00 "Вести".
21.00 "Фальшивая нота". 4-я и 5-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.55 "Юрий Андропов. Терра Инкогнита", "Угрозы современного мира. Электронные деньги", "Угрозы современного мира. Жажда планетарного масштаба". Док. фильмы (12+).
03.20 "Неотложка". Сериал (12+).
04.15 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Защитница". Сериал (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Знай наших" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.15 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Опасный Бангкок". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Т.Ганиева. "Тамарис" (12+).**

## 16 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
16.50 "Наедине со всеми" (16+).
17.50 Чемпионат Европы по футболу 2016 Сборная Англии - сборная Уэльса. Прямой эфир из Франции.
20.00 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Практика". 21-я и 22-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
01.20, 03.05 "Ярость". Триллер (18+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Тайны следствия" (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Фальшивая нота". 6-я серия (12+).
21.45 "Личное дело майора Баранова". Комедия (16+).
23.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. Германия - Польша. Прямая трансляция из Франции.
01.45 "Казаки", "Человеческий фактор. Хранить вечно". Док. фильмы (12+).
03.15 "Неотложка". Драматический сериал (12+).
04.15 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Преград.net" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Защитница" (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Борсаҡ" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "История признания" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Семь чудес Башкортостана" (12+).**
**17.15 "Учим башкирский язык" (0+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Малый бизнес" (12+).**
**20.30 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Заложник смерти" Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 А.Атнабаев. "Близнецы" (12+).**

## 17 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.50 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+).
23.50 Чемпионат Европы по футболу 2016. Сборная Испании - сборная Турции. Прямой эфир из Франции.
04.40 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 Футбол. Чемпионат Европы-2016. Италия - Швеция. Прямая трансляция из Франции.
19.45 "Вести. Дежурная часть".
20.00 "Вести".
21.00 "Фальшивая нота". 7-8-я, заключительная, серии (12+).
22.55 "Проездной билет". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
03.00 "Юрий Соломин. Власть таланта" (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Защитница" (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Кино государственной важности" (12+).**
**12.45 "Телелавка" (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (12+).**
**13.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.45 "Смутное время. И.Арманд" (6+).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.15 "Большой чемодан" (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "ДОСААФ: Испытано на себе" (12+).**
**20.30 "Жизнь, которой не было". Сериал (16+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Дом вдребезги". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Ф.Бурнаш. "Молодые сердца" (12+).**

## 18 ИЮНЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.10, 06.10 "Как украсть миллион". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Смешарики. Новые приключения".
08.35 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Михаил Державин. "Во всем виноват Ширвиндт" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Теория заговора" (16+).
14.10 "На 10 лет моложе" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Кубанские казаки". Комедия.
17.20 "Угадай мелодию".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.15 "Серебряный бал". Концерт Александра Малинина (12+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "МаксимМаксим" (16+).
00.10 "Форсаж-6". Худ. фильм (16+).
02.35 "Босиком по мостовой". Худ. фильм (16+).
04.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.45 "Мы с вами где-то встречались". Худ. фильм.
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Михаил Боярский" (12+).
11.00 "Вести".
11.25 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Врачиха". 8 серий. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Врачиха". Продолжение сериала
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "От печали до радости". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.55 "Вечная сказка". Мелодрама (12+).
03.00 "Марц Турецкого-2". Сериал (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Болт и Блип спешат на помощь" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30, 15.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 "В семье единой".**
**19.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Легенды спорта" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**02.15 "Личность" (12+).**
**02.30 Ф.Гарсиа Лорка. "Ах, Чапатера! Чудесная башмачница" (12+).**

## 19 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Женя, Женечка и "Катюша".
07.45 "Армейский магазин".
08.20 "Смешарики. ПИН-код".
08.35 "Здоровье".
09.40 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым" (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Следуй за мной".
10.40 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.45 "Гости по воскресеньям".
13.40 "Здорово жить!" (12+).
15.40 "Призвание". 16-я церемония вручения премии лучшим врачам России.
17.40 "Клуб Веселых и Находчивых". Летний кубок в Сочи (16+).
19.55 "Аффтар жжот" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?"
23.40 "Август". Драма (16+).
01.55 "Похищенный сын. История Тиффани Рубин". Худ. фильм (12+).
03.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00 "Возврата нет". Худ. фильм (12+).
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.25 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.30 "Любовь - не картошка". 8 серий. Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Любовь - не картошка". Продолжение сериала (16+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Охраняемые лица". Криминальный сериал (16+).
02.30 "Негромкое кино Бориса Барнета". Док. фильм (12+).
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Алиса знает, что делать" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Легенды спорта" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Автограф" (12+).**
**15.30 "ДОСААФ: Испытано на себе" (12+).**
**15.45 "Мир настоящих мужчин" (12+),**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 Концерт Р.Зулькарнаева (12+).**
**18.00 "История признания" (12+).**
**18.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**18.30 "Господин Никто". Худ. фильм (16+).**
**21.00 "Сила закона в его исполнении" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.30 "Защитнег". Худ. фильм (16+).**
**02.15 М.Ладо. "Очень простая история" (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ КИНОҺЫ




Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА төҙөнө.

## КОТЛАЙБЫҘ!

Хәйбулла районы Вәзәм ауылында йәшәүсе ҡәҙерле кешебеҙ
**МУСИНА**
**Зәкиә Шәкирйән ҡыҙын**
60 йәшлек юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ!

Уңған, тынғыһыҙ, хәстәрлекле, сабыр йөрәкле әсәйебеҙгә ҡаҡшамаҫ ныҡлы һаулыҡ, уңыштар, балаларының изгелеген, шатлыҡ-ҡыуаныстарын күреп, бәрәкәтле, имен тормошта оҙон, бәхетле ғүмер кисереүен теләйбеҙ.

*Беҙҙең өсөн күпме тырыштың һин,*
*Уйландың һин ғүмер эсендә.*
*Онотмайбыҙ, әсәй, бер ҡасан да,*
*Рәхмәт һиңә барыһы өсөн дә.*
*Сәләмәт бул, гел йылмайып йәшә,*
*Бәхет ҡунһын күңелең түренә.*
*Барыбыҙға ҡанат-терәк булып,*
*Талмай атла ғүмер үренә!*

**Иң изге теләктәр менән улдарың Руслан, Хәниф, киленең Зөлфиә, ейәнең Ислам.**

*ВИКТОРИНА*

## ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Абдрахман Джамиҙың "Яҙғы баҡса" китабының жанрын билдәләгеҙ.**
а) проза;
б) поэзия;
д) драматургия.

**"Башҡортостан иҫән ҡала, тиһәң, Бер йәнемә миллион үлем бир!" Был шиғыр юлдарының авторы кем?**
а) Шәйехзада Бабич;
б) Мәлих Харис;
в) Ғәлимов Сәләм;
г) Салауат Юлаев.

**Буҙа, талкан һәм башҡа милли ризыҡтар әҙерләү буйынса үҙ эшен асҡан әҙибәне, әүҙем йәмәғәт эшмәкәрен атағыҙ.**
а) Гөлсирә Ғиззәтуллина;
б) Мәрйәм Бураҡаева;
в) Гөлфиә Иҙелбаева-Юнысова;
г) Гүзәл Ситдикова.

**Иҙел РӘХИМОВ төҙөнө.**

**20-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Сағылыш. Барый. Тойғоло. Сүрә. Радист. Ҡорайт. Тула. Оро. Вигвам. Алаша. СНИЛС. Иҙриси. Тәфтизан. Арнштам. Верн. Урал. Кипр. Заде. Рәми. Нант.

**Вертикаль буйынса:** Ҡанатһыҙ. Сыртланова. Алтын. Тәртип. Шәкерт. Ғәбәйҙуллин. Мурзин. Олоһо. Шайморатов. Интеллект. Гәрәев. Исаев. Толом. Иман.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Июнь (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ахшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (8) дүшәмбе | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 14 (9) шишәмбе | 2:41 | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 15 (10) шаршамбы | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 16 (11) кесе йома | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 17 (12) йома | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 20:53 | 23:23 |
| 18 (13) шәмбе | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 19 (14) йәкшәмбе | 2:40 | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*КИҪӘТӘБЕҘ!*

# ЙӘЙГЕ СИРҘӘР

**Һәр миҙгелдең үҙ уңайһыҙлыҡтары. Ә бына йәйге осорҙа беҙҙе ниндәй ауырыуҙар һәм хәүеф һағалай һуң?**

### Бөжәк тешләһә

Серәкәй, бал ҡорто, һағыҙаҡ, күгәүен, траш (шершень), иңкеш тешләүенән урындағы реакция (шешенеү, ҡыҙарыныу, лимфа төйөндәре ҙурайыу) һәм ағыуланыу билдәләре булыуы (күңел болғаныу, ҡоҫоу, өшөү, быуындар һыҙлау), баш ауыртыу, температура күтәрелеү, артериаль ҡан баҫымы түбәнәйеү, тын ҡыҫылыу, анды юғалтыу мөмкин.

**Ни эшләргә?** Тәү сиратта ҡорт ҡаяуын алырға кәрәк, һуңынан ағыуын һурып алырға, киң таралып китмәһен өсөн яранан өҫкө яҡҡа жгут һалырға, антигистамин дарыу (зиртек, кларитин) эсергә кәрәк. Профилактик саралар иһә ябай: бөжәктәр күп булған урындарҙы алыҫтанырақ урап үтергә, кейенеп йөрөргә. Әгәр ҙә инде һеҙҙе талпан тешләһә, нисек кенә үҙегеҙҙе яҡшы тойһағыҙ ҙа табибҡа күренергә кәрәк.

### Миозит

Был сир оҙайлы йөкларға йә кондиционер алдында ултырырға яратыусыларҙа барлыҡҡа килә. Сөнки был ҡыш көнө асыҡ тәҙрә төбөндә оҙаҡ баҫып тороуға тиң. Йоклап торғандан һуң һеҙ мускулдарығыҙ ауыртыуын, хәрәкәт иткән һайын хәл бөтөүен тояһығыҙ.

**Ни эшләргә?** Һыҙланыуҙы баҫыу өсөн ятып торорға, массаж яһатырға, спиртлы компресс һалырға, шешенеүгә ҡаршы төнәтмәләр эсергә мөмкин.

**(Дауамы. Башы 23-сө һанда).**

*Башҡаларға изгелек эшләгән кеше иң тәүҙә үҙенә изгелек эшләй, сөнки ул был ҡылығынан оло ҡәнәғәтлек кисерә.*

*(Сенека).*



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# СИБАЙ ИНСТИТУТЫНЫҢ...

## йәштәрҙе берләштерер байрамы



**Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында уҡыу йылы аҙағында студенттарҙың, уҡытыусыларҙың бар өлкәләге уңыштарын барлап, яуаплы имтихандар алдынан һәр кемгә матур кәйеф бүләк иткән һабантуй үткәреү матур йолаға әйләнгән. Был юлы байрам институттың 25 йыллыҡ юбилейына арналды.**

Уҡыу йорто майҙанына матур итеп биҙәлгән тирмәләр теҙелеп киткән. Халҡыбыҙ йолаһы буйынса, саҡырылған ҡунаҡтарҙы күпереп бешкән икмәк, сәк-сәк һәм ҡымыҙ менән ҡаршы алдылар. Артабан уҡыу йорто ихатаһында урынлашҡан Рәсәй һәм Башҡортостан бөтөнлөгөн һәм именлеген булдырыуҙа оло хеҙмәт күрһәткән күренекле шәхестәрҙең бюстарына сәскә һалынды. Быйылғы һабантуй институт өсөн тағы ла бер мөһим ваҡиға менән ҡыуаныслы. Был матур көндә Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина, Рәми Ғарипов, Зәйнәб Биишева бюстары, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Зәйнулла Рәсүлев, Исмәғил Тасимов, Кинйә Арыҫланов, Хөсәйен Әхмәтов, Йосоп Харрасовтарҙың барельефтары рәтенә тағы ла бер мәшһүр шәхесебеҙҙең - граждандар һуғышы ҡаһарманы, күренекле дәүләт эшмәкәре, хәрби етәксе Муса Мортазинға арналған барельеф өҫтәлде.

Студенттар һабантуйын биш факультет студенттары башҡарыуында башҡорт флешмобы йәмләне. Йола буйынса, һабантуй флагын күтәреү институттың иң яҡшы студенттарына - Нәйлә Әхмәтшина (иҡтисад факультеты), Гөлшат Юнысова (юридик факультеты), Луиза Ноғоманова (тәбиғи-математика факультеты), Әҙилә Ишмырҙина (технология факультеты), Гөлдәр Вәлиеваға (педагогия факультеты) тапшырылды.

Сәхнәлә көнө буйы йыр-моң гөрләп торҙо, студенттар төрлө милли уйындарҙа үҙҙәренең таһыллығын һынаны. "Төйәләҫ" уҡыу-эксперименталь комплексында ат спорты менән шөғөлләнеүсе һигеҙ саң ҡыҙҙың сығышы бигерәк тә сағыу булды.

- Сибай институты - республикала студенттар һабантуйын үткәреүсе беренсе-бер уҡыу йорто. Тап ошондай ҙур сараны үткәреү студенттарҙың актив, уҡыуҙа тырыш булыуына йоғонто яһайҙыр, тип уйлайым. Сибай институтындағы таҙалыҡ, матурлыҡ, үҙ-ара мөнәсәбәт, мәҙәнилек йылы бер мөхит булдыра. 25 йыл элек Сибай институты филиалын асыу буйынса ҙур бәхәс булғанын хәтерләйем. Бөгөн уны асыу ни тиклем дөрөҫ ҡарар булыуын күрәбеҙ. Сибай институты матур һөҙөмтәләр менән гел дә ҡыуандырып тора һәм киләсәктә лә уға беҙҙең өмөтөбөҙ ҙур, - тине сағышында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты ағзаһы Румил Тәлғәт улы Аҙнабаев.

Һабантуйҙа башҡорт халҡының милли уйындары: бағанаға менеү, тоҡ менән бәрешеү, арҡан тартышыу ойошторолдо. Көрәш майҙаны ла үҙ батырҙарын йыйҙы. Ғөмүмән, студенттар рәхәтләнеп күңел асты, уйындарҙа әүҙем ҡатнашты. Байрам уҡыу йылына йомғаҡ яһау ғына түгел, ә милли йолаларҙың, гөрөфғәҙәттәрҙең йәш быуынға еткерелеүе менән дә мөһим. Тап ошондай саралар йәштәрҙе берләштерә лә инде.

**Гөлфирә ИСХАҠОВА.**

ҺҮҘЛЕК



## БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Сырмалсыҡ кәрешкә** - горошек волосистый
**Сысканборос** - вязель
**Сыскан борсағы, сыскан кәрешкәһе** - горошек мышиный
**Сыскан ҡойроғо** - истод
**Сәйут** - чайот
**Сәпсегут** - воробейник полевой
**Сәнскеле таштишәр** - камнеломка колючая
**Сәпсек күҙе** - незабудка полевая
**Сәскәле ҡамыш** - сусак зонтичный
**Сәсмәүбаш** - короставник полевой
**Сәүкә борсағы** - горох полевой
**Тайтояҡ, ҡолонтояҡ** - копытень европейский
**Таҡыябаш** - живокость высокая
**Тал** - ива, верба
**Талдут** - вербейник обыкновенный
**Талкан емеш** - толокнянка обыкновенная, медвежье ухо
**Талүлән, баллы ҡыуаҡ** - дрок красильный
**Тарбаҡлы ҡыңғырау сәскә** - колокольчик раскидистый
**Тарма, киндер** - конопля
**Тармаҡлы ҡырҡбыуын** - хвощ ветвистый
**Тарут** - бор развесистый
**Тары** - просо
**Тар япраҡлы һыу йөнө** - рдест узколистный
**Татлы тамыр** - солодка Коржинского
**Татлы һуған, поррей һуғаны** - лук поррей

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

## УФТАНЫУҘАН...

### ул тыумаҫ

- Оятһыҙҙа - бит, арыҡ малда ит булмай.
- Танһыҡ ашың уртаҡлаш - ырыҫы китмәҫ.
- Ныҡ йоҙаҡ өйҙә, "аҡыллы йоҙроҡ" илде һаҡлар.
- Илдем-ялдым ике туйыр, киҙәмдең ирене кибер.
- Ятыр ҡорһаҡ яңшамай, аҙ ашап ят.
- Мәлһеҙ ашау - эс ауырыуы, юҡты һөйләү йөрәк сире.
- Уфтаныуҙан ул тыумаҫ, көрһөнөүҙән гөл үҫмәҫ - аҡыҡ аҡылын алға ҡуй.
- Томан ерҙе агарта, һағыш йөҙҙө һарғайта.
- Бер аҙым алға, икеһе артҡа - ҡартлыҡ ҡағиҙәһе.
- Гәйбәтсегә бал ялатыуҙан баллы телгә әйләнмәҫ.
- Хаҡы түбән малдың ҡиммәте лә, ҡәҙере лә булмай.
- Халыҡтың азамат ирҙәре аҙ икән - ил артҡа тәгәрәй.
- Ышанған тауҙа кейек, ялған дуҫта төйәк юҡ.
- Туҡ кикерғәндә ас тәкөрөгөн йота.
- Бай аҡсаһын һанай, ярлы кеҫәһен ҡапшай.
- Китек ҡалаҡ ауыҙ йырта, кителгән күңел уйға һала.
- Һәр хәтирә күңел йылытмай, һәр иҫтәлек йөҙ балҡытмай - һөрөмөн дә йоҡтора.
- Ҡурҡаҡ башын, һаран ашын йәшерә.
- Йөҙә ай, теле гөл - ярамһаҡ ҡиәфәте.
- Алдында һағыҙ, артында һике сәйнәү - ике йөҙлөнөң ғәҙәте.
- Ҡурҡыныс алдында ҡаялай тор - еңеп сығырһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ТАТЫУ БУЛҺАҢ...

### бер ҡуй бөтә ҡәбиләнде туйҙырыр

Алтынды ҡоя белмәгән иретер,
Тирене иләй белмәгән серетер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше биҙәге - аҡыл, аҡыл биҙәге - сабырлыҡ, сабырлыҡ биҙәге - ҡыйыулыҡ, ҡыйыулыҡ биҙәге - йомшаҡлыҡ.

**(Боронғо һинд мәҡәле).**

Әгәр ҙә һине берәү ҙә яратмай икән, был бары тик һинең генә ғәйебең.

**(Ф. Додридж).**

Башҡаларға изгелек эшләгән кеше иң тәүҙә үҙенә изгелек эшләй, сөнки ул был ҡылығынан оло ҡәнәғәтлек кисерә.

**(Сенека).**

Башҡаларҙы хөрмәт иткән кеше генә хөрмәткә лайыҡ.

**(В. Сухомлинский).**

Кешенең йөҙө уның ауыҙынан сыҡҡан һүҙгә ҡарағанда ла күберәкте һөйләй ала: тел кешенең уйын ғына әйтә, ә йөҙ - тәбиғәттең үҙенең уйын сағылдыра.

**(А. Шопенгауэр).**

Йомартлыҡ күпме биреүҙә түгел, ә ваҡытында биреүҙә.

**(Ж. Лабрюйер).**

Бары тик матур булыуҙы ғына маҡсат итеп ҡуйған ҡатын-ҡыҙҙан да бәхетһеҙе юҡ.

**(Б. Фонтенель).**

Үҙеңдең буйың етмәгән нәмәгәләр һәр саҡ ғашиҡ булып йәшәргә кәрәк. Юғарыға ынтылыуҙан кеше буйға үҫә.

**(М. Горький).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Йыланды күҙ алдына килтерәйек. Уның ҡойроғо башына былай ти: "Мин баш яҡта булырға тейешмен". Баш ҡойроҡҡа былай тип яуап бирә: "Һәр ваҡытта ла мин ал яҡта йөрөйөм. Ниңә хәҙер һинеңсә булырға тейеш әле?" Бәхәс һөҙөмтәһендә баш еңә һәм алға сыға. Ләкин шул ваҡыт ҡойроҡ ағасҡа уралып тора һәм баш алға китә алмай, тотҡарланып ҡала. Аптырагас, баш ҡойроҡто алға ебәрә. Шул саҡ йылан ут янып торған соҡорға төшөп китә һәм һәләк була...**

**Уҡыусылар һәм остаздар менән дә йыш ҡына шулай була. Уҡыусылар: "Остазым ҡарт инде, шулай булһа ла ул алда йөрөй. Ә алда беҙ, йәштәр йөрөргә тейеш..."- тип фекерләй. Һөҙөмтәлә..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 1022/06